ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 май (һабанай) 2018

№ 18 (800)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡса тотона белмәйбеҙ,**

**сөнки эш хаҡыбыҙ ҙа, пенсиябыҙ ҙа көндәлек ихтыяждан артып ҡалмай**



3

**Фонтандар күҙҙе иркәләй**



4

**Кеше кешегә табынмаһын,**

**ул хеҙмәте өсөн халыҡ һөйөүен яулай ала, әммә бөйөк була алмай**



8-9

**"Хәҡиҡәт яҡлауһыҙ**

**ҡалыуҙан ҡурҡам..."**




12-13

**ТВ-программа** 14

***Ҡурҡып йүгергәнде күргән дошман һине тағы ла нығыраҡ эҙәрлекләйәсәк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла нығыраҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк. (М. Монтень).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй һуғыш йылдары хәтирәһе һаҡлана?

***Алһыу КУСӘРБАЕВА, Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығы белгесе:*** Кешелек донъяһы өсөн иң ҙур афәттәрҙең береһе - һуғыш. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң бер быуатҡа яҡын ваҡыт үтһә лә, унын ҡанлы шауҡымы әле булһа йөрәктәрҙе өшөтә. Ул бит һәр өйҙөң ишеген ҡағып, миллиондарса кешенең ғүмерен ҡыйып, фронтта ла, тылда ла ҡот осҡос эҙемтәләргә килтергән. Һәр кемдең ғаиләһендә һуғыш йылдары хәтирәләре йәшәй. Минең әсәйемдең олатаһына ике һуғышты үтергә тура килгән. Крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән Бураншин Ноғман Ғөбәйҙулла улы мәсеттә алған белемен тулыландырып, өҫтәмә рәүештә урыҫса уҡырға һәм яҙырға өйрәнгән. 1914 йылда Беренсе донъя һуғышына китә. Яу яланында контузия алып, тотҡонлоҡҡа эләгә. Германия фермерына хеҙмәт иткән ваҡытында немец телен яҡшы итеп өйрәнә. Һуғыш тамамланғас, һәр эштең рәтен белгән, ғәҙел, намыҫлы хеҙмәтсеһен бер ҙә ҡайтарып ебәргеһе килмәгән фермер Ноғманға үҙенең ҡыҙын кәләшлеккә биреп, бында ҡалырға тәҡдим итә. Тик тыуған яҡтарын, туғандарын ныҡ һағынған егет ике лә уйламайынса Йылайыр районы Ишбулды ауылына ҡайтып китә. Инде тыныс тормошта йәшәргә күнегеп кенә барғанда, кәләш алып, алты балаға ғүмер биреп өлгөргән Ноғманды 1943 йылда тағы ла һуғышҡа алалар. Бөйөк Ватан һуғышын ул тәржемәсе булып үтеп, бөйөк Еңеүҙе Берлинда ҡаршылай. Һуғыштан ҡайтҡас та ул ҡул ҡаушырып ултырмай, тыуған ауылында төҙөүселәр бригадиры булып эш башлай. Бер үк ваҡытта малсылыҡ һәм ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. Беренсе донъя һуғышында алған контузияһы уға һәр ваҡыт үҙен "хәтерләтеп" тора һәм ахыр сиктә ғүмеренә сик ҡуя. Ҡарт олатайым тураһындағы хәтирәләр беҙҙең ғаиләлә быуындан-быуынға тапшырыла килә. Һәр һалдаттың ҡаһармандарса алышы, үҙ-үҙен аямайынса көрәшеүе беҙҙең бөгөнгө тыныс тормошобоҙҙоң нигеҙе. Беҙгә уларҙы бер ҡасан да онотторға ярамай. Олатайҙар, ҡартатайҙар рухы беҙгә быны ғәфү итмәҫ.

***Гөлназ ӘМИНЕВА, К. Дәүләткилдеев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты уҡытыусыһы:*** Бөйөк Ватан һуғышы ниндәй ҡорбандар алып килеүен яҡшы беләбеҙ. Ошо миллионлаған ҡорбандар араһында минең олатайым - Әминев Хәйретдин Фазылйән улы ла бар. Белорет районы Мулдаҡай ауылында тыуып үҫкән Хәйретдин 1930 йылдарҙа Инйәрҙә урынлашҡан Урман техникумын, унан һуң Свердловск ҡалаһында институт тамамлай. Әүҙем комсомолға ошо уҡ райондың Исҡужа ауылындағы Ләмәз ағас эшкәртеү хужалығын етәкләүҙе ышанып тапшыралар. "Тыуған илебеҙ ҙурая, илгә ағас кәрәк", тип йыш ҡабатлар булған Хәйретдин Фазылйән улы шул ваҡыттарҙа. Фронтҡа ул 1943 йылда алына. Пулеметсылар взводы менән командалыҡ итә. Курск дуғаһындағы ҡаты алыштар ваҡытында унын взводы дошмандың аэродромына һәм тимер юлы үҙәгенә һөжүм итә. Был алышта лейтенант Әминев 12 немецтың башына етә һәм икәүһен пленға ала. 269-сы дивизия пулеметсыһы Хәйретдин Әминевтың ғүмере Орлов өлкәһе Мценский районы Савенково ауылын немецтарҙан азат иткән саҡта, 1943 йылдың 20 июлендә өҙөлә. 21 июлдә сыҡҡан "Ватан өсөн" гәзитендә яҙылыуынса, башҡорт егете Хәйретдин ҡәбере янында һалдаттар "Фашистарҙы парторг Әминевса туҡмарға!" тип ант итә. Бөйөк Еңеүгә үҙ өлөшөн индергән, тыуған иле өсөн ғүмерен биргән олатайым менән ғорурланып йәшәйем. Унын исемен, батырлығын вариҫтары һәр саҡ күңелдәрендә йөрөтәсәк. Еңеүҙең ниндәй оло ҡайғылар, әсе күҙ йәштәре, йәш кенә көйө өҙөлгән ғүмерҙәр аша килеүен тик 9 майҙа ғына түгел, ә һәр көндә лә иҫтә тотоу мөһим икәнлеген онотмаһаҡ ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# УРАЛ ЙӘНЕ. ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ

**Өфөлә республиканың туристик бренды менән таныштырыу сараһы уҙҙы. Уны Башҡортостандың Туризм һәм эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты заказына ярашлы Paradox box реклама студияһы эшләгән. Был - милли биҙәктең һанлы фрагменты фонында "Terra Bashkiria" логотибы һәм "Урал йәне. Евразия йөрәге" слоганы.**

Брендбук менән идея авторы һәм Paradox box студияһының арт-директоры Илшат Байбурин таныштырҙы. Ул продуктты нисек әҙерләүҙәре - төрлө социаль, йәш, профессиональ төркөмдәрҙә асыҡтан-асыҡ фекер алышыуҙар хаҡында һөйләне. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов продуктҡа баһа бирҙе: "Һөҙөмтә ҡыҙыҡлы. Бәлки, ул бәхәслелер ҙә, ләкин ҡыҙыҡлы. Республика яңы брендҡа эйә була. Беҙгә уның йәшәп китерме-юҡмы, республикала һәм унан ситтә ҡабул итерҙәрме икәнлеген күҙәтергә кәрәк. Әммә шуныһы асыҡ: был бик кәрәкле, мөһим һәм ваҡытлы эш. Туристик потенциал хаҡында күптән һөйләйбеҙ, ләкин ул лайыҡлы үстерелмәне. Туристарҙы йәлеп итерҙәй образдар етмәй. Ошо эште башҡарған командаға рәхмәтлемен. Мин ҡырҡа сәйәсиләштерелгән баһаларҙан ситкә китеүҙе һорайым, сөнки республиканы нисек дөрөҫ атау тураһында йыш ҡына бәхәстәр сығып тора. Республика Конституцияһында Башҡортостан тип яҙылған. Быны бер кем дә ғәмәлдән сығармаған. Туристик бренд - исем алыштырыу түгел, был, һис шикһеҙ, республикабыҙҙы стилләштерелгән, бер аҙ ябайлаштырылған төрҙә таныштырған символ. Уның тирәләй ниндәйҙер полемика барлыҡҡа килеүе мөмкин, ләкин мин сәйәсиләштерелгән баһаларҙан ситкә китеүҙе һорайым. Мәҫәлән, Бөйөк Британия - Англия ғына түгел, илдең исеме тураһында һүҙ барһа ла, бер кем дә үпкәләмәй, ә беҙҙә - туристик бренд тураһында ғына һүҙ бара. Бындай миҫалдар байтаҡ.

Тағы ла шуныһы мөһим: бренд бик заманса. Бақтиһән, айыуҙар, бүреләр, ҡоштар, үлән, ҡояш кәрәкмәй. Быларҙың һәммәһен дә һәр кешегә аңлайышлы һәм асыҡ, ҡыҙыҡлы, матур ысул менән йәшерергә мөмкин. Беҙ киләсәккә ҡарарға, йәштәргә йүнәлеш алырға тейешбеҙ. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, улар ошо брендты бик яҡшы ҡабул иткән. Вазифамдан ситкә китеп, миңә лә, республикала йәшәгән ябай кешегә, бренд оҡшаны, күңелемә ятты. Был пикселдәр, сит телдәге terra һүҙе ятһыныу тыуҙырманы. Боронғо латин теленДәге барлыһына ла билдәле һүҙ. Әгәр бренд эшләнеп та уңышлы буйһа, ул тулы тормош менән йәшәп китер, проспектарҙа, турбазаларҙа һәм шифаханаларҙа ҡулланылыр, уның менән спорт командаларыбыҙ ҙа файҙаланыр. Брендты ҡулланған өсөн түләргә кәрәкмәй. Ошо образдар аша донъяға күп быуатлыҡ тарихыбыҙҙы хөрмәт итеүебеҙҙе һәм шул уҡ ваҡытта алға ҡарауыбыҙҙы, өмөтлө һәм заманса булыуыбыҙҙы күрһәтергә тейешбеҙ".

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй һуғыш йылдары хәтирәһе һаҡлана?

(Башы 1-се биттә).

*Ләйсән ҒӘЙНЕТДИНОВА, рәссам:* Мин ҡыҙыма һәр саҡ Бөйөк Ватан һуғышы, унда ҡатнашҡан ҡартатаһы Рахманғолов Нурмөхәмәт Хафиз улы хаҡында, оло Еҙеү тураһында һөйләйем. Бәләкәстәр һуғыш һәм тыл ҡаһармандары тураһында, еңеүҙең ниндәй ҙур юғалтыуҙар аша яуланыуын белеп үҫергә тейеш. Олатайым Әбйәлил районы Мәхмүт ауылында эшселәр ғаиләһендә тыуған. Ул 5 класты тамамлаған та хеҙмәт юлын башлай. Һуғышҡа тиклем бер туған ағаһы менән ағас әҙерләүҙә йөрөй, ә 1941 йылдың 1 октябренән алтын эҙләү шахтаһында эшләй. Фронттағы юлын 128-се дивизияның 533-сө уҡсылар полкында пулеметсы булып башлай. I Украина фронтының 2-се эшелоны составында алыштарҙа ҡатнаша. Фронттағы хәлдәрҙе теркәп барған дәфтәре беҙҙең ғаиләлә изге ҡомартҡы булып һаҡлана. Яҙмаларҙы уҡығанда тән генә түгел, йән өшөп китҡән һымаҡ. Бына ул ниҙәләр яҙа. "Алға бик тиҙ барабыҙ. Ял өсөн иртән һәм кисен 2-шәр сәғәт бирелә. Ашау аяҡ өҫтө тиерлек. Әгәр ҙә туктаған ваҡытта ашап өлгөрә алмаһаң, икенсегә туктағанды көтөргә кәрәк. Тик урмандарҙа ғына туктайбыҙ. Көндәр һыуыған һайын ҡыйыныраҡ була бара. Ялға туктаған саҡта тиҙ генә ҡапҡылап алғас, ылыҫлы ағас ботаҡтарын йәйеп һалып, йоҡлап алырға тырышаһың. Иң тәүҙә аяҡ өшөй, шуға аяҡты йылытыр өсөн тороп һикергеләп алаһың. Инде йылынып тағы ятайым тиһәң, торорға әмер бирелә. Усаҡ яғырға рөхсәт ителмәй".

Һуғыштың аҙағына тиклем була олатайым яу яланында. Унан һуң Көньяҡ Сахалин утрауында хеҙмәт итеп, 1949 йылда ғына тыуған яғына ҡайта. Һуғыштан һуң Баймаҡ районының 2-се Әтҡол ауылында йәшәй. Өләсәйем Райхана Һәүбән ҡыҙы менән 3 улға һәм 2 ҡыҙға ғүмер биргәндәр. Ғәҙел, намыҫлы ғүмер кисергән олатайым 1992 йылда арабыҙҙан китте.

*Гәүһәр БАЙҒОЛОВА, Йылайыр районы:* Атайымдың тормошо үҙе бер китапҡа торошло. Йылайыр районы Һынташ ауылында мулла ғаиләһендә донъяға килгән Алсынов Хәкимйән Әгзәм улы. Уның әсәһе муллаһың өс ҡатынының береһе була, бик иртә донъя ҡуя. "Әсәй үлһә, атай еҙнәй", тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер инде. Атаһы иҫән булһа ла, Хәкимйән ике ағаһы менән етемлектең нужаһын етерлек татый. Шуға ла 3-сө класты тамамлағас, үҙ йүнен үҙе күрә башлай. 1939 йылда армия сафына алынғанға тиклем өйләнеп тә өлгөрә. Һуғыш башланғас та фронтҡа эләгә. Тәүҙә 91-се уҡсылар дивизияһында, 1942 йылдан 207-се гвардия уҡсылар полкы составында дошманды ҡыйратыуҙа ҡатнаша. Полкташтары менән бергә Украина, Беларусь, Польша, Чехословакия, Венгрия һәм башҡа Европа илдәрен фашистарҙан азат итә.

1945 йылда, Украина ерендәге алыштар мәлендә Хәкимйән олатайым һәм бер иптәше ҡаты яраланып, полктарынан тороп ҡала. Яралы һалдаттарҙы украин бабайы утарға алып ҡайтып, үҙенең аҙбарында йәшереп дауалай. Тубыҡ, тирәҡ һөйәктәре ярсылған, умыртҡа һөйәге ҙур зыян күргән атайыма 15 көн йәшеренеп ятҡандан һуң, эвакогоспиталгә элэгә. Унда 4 ай дауаланғандан һуң олатайыма 2-се төркөм инвалид танытмаһы тотторол, тыуған яғына ҡайтаралар. Еңеү хәбәрен ул юлда ишетә. Тыуған ауылында уны ҡаршы алыусы кеше ҡалмай - атаһы икенсе районға сығып киткән, ҡатыны үпкә ауырыуынан, ә ике балаһы эре сәсәктән үлгән була. Бер йылдан атайым ауылдашы Мәстүрәгә өйләнеп, 11 балаға ғүмер бирәләр. Ләкин ауыр һуғыш яралары атайымдың ғүмерен иртә өҙҙө, ул 57 йәшендә генә беҙҙең аранан китеп барҙы.

Атайымдың бер ҡумта көндәлектәре бар ине. Өй башында һаҡланған яҙмаларға тейергә рөхсәт булмаһа ла, йәшеренеп кенә менеп уҡып төшөр инек. Унда Украинала барған ҡан ҡойоштоң ауыһыҙлығы, Висла-Одер операцияһы тураһында әсенеп яҙған юлдарын уҡығаным булды. Бөгөнгә көндә Украина ерендә барған мәхшәрҙе күрһә, уларҙың азатлығы өсөн йәнен аямаған атайым нимә тиер ине икән? Үткәндәрҙән фәһем ала белмәүебеҙ, тарихты һанламауыбыҙ ниндәй хәүеф-хәтәрҙәргә килтерергә мөмкин - ыҡ-ҡыйралыштарға алып килер, тип тә уйламайбыҙ. Ҡыҙғаныс хәл был.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**1 апрелдән 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармановaның "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" һәм башҡа матур китаптарға эйә була алыр. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● Ә кемдәрҙә бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма ул **"Киске Өфө"**. Алдырығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓9 май Башҡортостанда "Үлемһеҙ полк" дөйөм Рәсәй гражданлыҡ-патриотик акцияһы үтәсәк. Өфө ҡалаһы хакимиәте яҙҙамы менән был сара баш ҡалала быйыл бишенсе тапҡыр уҙа. 2017 йылда унда яҡынса 53 мең кеше ҡатнашҡан. "Үлемһеҙ полк" 12.00 сәғәттә башлана һәм Октябрь проспекты буйлап "Спорт" туҡталышынан "Дан бульвары" туҡталышына тиклем үтәсәк. Һорауҙар буйынса Өфө ҡалаһының район хакимиәттәренә, шулай уҡ ҡаланың Мәғариф идаралығына, www.ufa-edu.ru адресына мөрәжәғәт итергә була.

✓БР Милли музейы "Музейҙарҙа берҙәм кинолекторий" акцияһын иғлан итә. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 73-сө йыллығына арналған был сара мәктәп уҡыусыларына һәм студенттарға тәғәйенләнгән. Апрелдә "Звезда" телеканалы "Легенды армии" документаль циклы сиктәрендә 112-се (16-сы Гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов тураһында фильм күрһәткәйне. 8 майҙа ошо акцияла ҡатнашыусы республиканың бөтөн музейҙарында 11.00 сәғәттән 12.00 сәғәткә тиклем фильмды ҡарау мөмкинлеге бар.

✓Республика эш хаҡын иң түбән хеҙмәт хаҡы күләменә ҡарата арттырыу йөнәтенән федераль үҙәк билдәләгән бөтә шарттарҙы тәьмин итә. Атап әйткәндә, 1 майҙан иң түбән хеҙмәт хаҡы күләме йәшәү минимумына тиңләштерелә. Урал коэффициентын иҫәпкә алғанда Башҡортостанда был сумма 12 838 һум тәшкил итәсәк һәм ул 33 меңгә яҡын кешегә ҡағыласаҡ. Был маҡсатҡа бюджеттан 1,3 миллиард һум бүленгән.

✓Башҡортостанда дүрт мең муниципаль мәҙәниәт йорто тәҙекләнделәрә. Финанслау күләме 1,5 миллиард һум кимәлендә көтөлә. Был мәсьәлә БР Хөкүмәте президиумы ултырышында раҫланды. "Ошо объекттарҙы тәҙекләндереү ике ҙур сара: республиканың 100 йыллығы һәм 2020 йылда Башҡортостанда Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреүгә әҙерлек барышында уҙа", - тип хәбәр итте республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

✓Мәшғүллек хеҙмәтенең яңы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда 21,3 мең тирәһе рәсми теркәлгән эшһеҙ һәм 47,2 мең буш эш урыны иҫәпләнә. Йыл башында республикала "рәсми" эшһеҙҙәр һаны 20,7 мең кеше булған.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# АҠСА ТОТОНА БЕЛМӘЙБЕҘ,

## сөнки эш хаҡыбыҙ ҙа, пенсиябыҙ ҙа көндәлек ихтыяждан артып ҡалмай



**Ниһайәт, илдә пенсионерҙарҙың нинә ярлы йәшәүе сәбәбен асыҡлап бирҙеләр беҙгә аҡсаның өҫтөндә ултырған аҡыллы кешеләр. Ғүмер буйы бил бөгөп, намыҫлы эшләһәк тә, беҙ, эшкинмәгәндәр, ни өсөн ярлы йәшәйбеҙ һуң? Ниңә беҙ һәр ваҡыт кемдәрҙеңдер күҙенә сүп булып килә лә төшәбеҙ? Ниңә ризаһыҙлыҡтарға, нәфрәттәргә сәбәпсебеҙ? Ниңә кемдәргәләр эшләргә (миллиардтарын ишәйтергә) ҡамасаулайбыҙ?**

Улай тиһәң, шау-шыу ҡуптарып йөрөгән йолҡоштар ҙа юҡ тирә-йүндә: һип-һил. Бер төрлө халәтенә күнеккән халыҡ барына риза булып көн күреп ята. Йәнәһе лә, ярлы булғаны өсөн пенсионерҙар үҙҙәре минауат: "аҡса туплай һәм уны инвестициялай белмәйҙәр". Шулай тип шелтәләй бит беҙҙе яҡташыбыҙ - Рәсәй Үҙәк банкы хужабикәһе Нәбиуллина ханым. Тик бына төп йәшәү ихтыяжына тартып-һуҙып еткерелгән уртаса эш хаҡынан, йә булмаһа, 10-13 мең пенсиянан өҙөп-йолҡоп ниндәй капитал тупларға була икәнен генә аңлатып торманы ул. Ә килемде инвестициялау тигәне бөтөнләй ниндәйҙер бер фантазия! Эльвира Сәхипзада ҡыҙыныҡы кеүек, йыллыҡ килемебеҙ 27 миллион булһа, беҙ ҙә нисек һөйләшергә белер инек. Бейектә ултырып, түбәндә ни барғанын күрмәү ғәйеп тә тойолмаҫ ине, әгәр был хәл йәш аралаш көлкө тыуҙырмаһа...

Уны шундуҡ икенсе бер аҡсалы әфәнде - финанс министры А. Силуанов күтәрмәләп алды: яҡшы йәшәргә теләһәгеҙ, дәүләттән генә көтөп ятмағыҙ, үҙегеҙҙе үҙегеҙ ҡайғыртығыҙ, тине ул яныраҡ ҡына Юғары иҡтисад мәктәбендә булып үткән конференцияла. Былыһы инде әле эшләп йөрөгән йәштәргә - буласаҡ пенсионерҙарға ҡағыла. Министр быныһ менән бөтөн граждандарҙы ла эш хаҡтарынан шәхси пенсия капиталына күпмелер күләмдә иғәнә кәсереп барыуҙы йөкмәтергә уйлай. Мәскәү юридик институты профессоры Эльвира Тучкова әйтеүенсә, Финанс министрлығы, бер кемдең фекерен иҫәпкә алып тормайынса, халыҡты аҡса туплау тоҙағына мәжбүрләмәксе. "Был, - ти юрист, - граждандар хоҡуғын тупаҫ боҙоу булып торасаҡ". Илдә ғәҙәти хәлгә әйләнгән коррупция шарттарында халыҡтың былай ҙа ҙур булмаған эш хаҡынан өҙөп-йолҡоп йыйылған аҡсаһы киләсәктә уның үҙенә тейеренә ышаныс та әллә ни юҡ. Бөгөн пенсияның туплама өлөшө менән нимә килеп сыҡты һуң? Бер эш хаҡынан һалыммы, коммуналь хеҙмәттәр йә капремонтҡа түләргәме, әллә пенсия туплай башларғамы?

Унан һуң, мәсьәләнең психологик яғы ла бар: йәш саҡта бит кеше ҡартлыҡ килеп етере һәм ошо көнөнә аҡса туплау хаҡында әллә ни уйланмай. Шуға күрә, пенсияның туплама өлөшө теләк буйынса булыр, тип өмөтләнеү ҙә икеле. Эксперттар белдереүенсә, донъя практикаһында фәҡәт теләк буйынса ғына туплама системаһы булдырыу тәжрибәһе юҡ әлегә. Илебеҙ хәленә килгәндә, Үҙәк Банк етәкселеге "үҙҙәре үткәргән тикшеренеүҙәрҙән" сығып, рәсәйҙәр ай һайын эш хаҡтарынан 6 меңгә тиклем аҡсаларын фондҡа күсерергә риза, тип белдерә. Тик ниндәй "тикшеренеүҙәр" хаҡында һүҙ барыуы ғына аңлашылып етмәй. Үҙәк Банк рәйесе урынбаҫары С. Шевцов әфәнде иһә шәхси пенсия тупланмаһының өҫтөнлөктәрен ябай халыҡҡа "популяр" телдә аңлатыуға тиклем барып етте хатта. Был система, уның фекеренсә, аҡса тотоноуҙа ихтияр көсө булмаған, "йомшаҡ характерлы" кешеләр өсөн дан инде бына! "Ғүмерегеҙ буйына ихтыяждарығыҙ менән бәрелештә йәшәйһегеҙ, һәм пенсиянан башҡа бер генә хеҙмәт тә һеҙгә холҡоғоҙ йәки тормош хәлдәре менән бәйле үҙегеҙҙең көсһөҙлөгөгөҙҙән арынырға ирек бирмәй. Пенсия тупланмағыҙ һеҙҙе ҡотҡарасаҡ. Ул бар, ләкин уға тейергә ярамай. Был бик мөһим",- ти ул. Уның "нәсихәт"енән ниндәй аҡыл алдығыҙ, йәмәғәт? Ябай халыҡты кәрәккән-кәрәкмәгәнгә лә аҡса туҙҙырырға күнеккән бер моңһоҙ итеп күрә түгелме һуң был әфәнде? Шундай юғарылыҡтан беҙҙең кимәлгә төшөп, әгәтләргә, аҡыл һатырға ла кәрәкмәҫ ине, әгәр эшләп аҡса алыусылар ҡатламы үҙ хеҙмәтенә лайыҡлы эш хаҡы менән дә тәьмин итеһә. Беҙҙең халыҡ бит бөгөн, нисек ғаилә аҫрарға, тигән ихтыяждан сығып аҡса тотона. Кеҫәһе ҡалындар ихтыяжы менән халыҡ ихтыяжын ғына айырырға ваҡыттыр ҙа инде. Эйе, минауатбыҙ, тип йөпләргә кәрәк Эльвира ханымды, аҡса тотона, унан да бигерәк, уны туплай белмәйбеҙ, сөнки эш хаҡыбыҙ ҙа, пенсиябыҙ ҙа көндәлек ихтыяждан артып ҡалмай ҙа ҡуя. Кем минауат - быныһы инде оҙайлы тарихыбыҙ буйына беҙҙе әҙәрлекләй килгән мәңгелек һорау...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БЕҘ ҺУҒЫШҠА ИНГӘНДӘ...

***Рамаҙан ҠОТОШОВ, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, журналист, яҙыусы:*** Мин XX быуаттың егермense йылдарында тыуған кеше. Беҙҙең быуынға бик күп ауырлыҡтар кисерергә тура килде, шуларҙың иң аяуһыҙы 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы булды. Ике ил араһындағы мөнәсәбәттәр бәрелеш менән тамамланыры билдәле ине, әммә уға әҙерләнеп өлгөрмәй ҡалдыҡ. Һәм һуғыштың башында күпме һалдат ҡырылды. Һалдатҡа яңы ғына алынған 1923 йылғы йәштәр тәүҙә ут аҫтына барып инде, 1924 йылғылар Курск дуғаһына эләктек, һуңынан Беларусь, Украина ерҙәрен азат итергә 1926-1927 йылғылар килде. Дүрт йыл дауамында барған һуғыш нисә быуын кешене харап итте, күпме завод, торлаҡ йорттар, тотош ауылдар ер менән тигеҙләнде, мал ҡырылды. Мин Өфөгә Севастополдән күсерелгән зенит артиллерияһы училищеһында алты ай уҡығандан һуң, 1943 йылдың февралендә фронтҡа киттем, Брянск фронтына эләктем. Саҡырыу алғас та беҙ шунда уҡ фронтҡа китергә тип ынтыла инек, йәнәһе, беҙ барып еткәнсе һуғыш бөтә, ҡатнаша алмай ҡалабыҙ. Йәшлек менән инңә төшкән ауырлыҡтарҙы күтәреп сыҡҡанбыҙҙыр ҙа инде. 24-се зенит артиллерия взводы командиры булып, Курск дуғаһында алышҡанда миңә 19 ғына йәш ине. Ошондағы мәхшәрҙә тәүге тапҡыр ҡаты яраландым. Йәш булғас, бик бирешмәнем, госпиталдә дауаланып сыҡҡас, тағы ла фронтҡа ашыҡтым. Артабан Беларусь, Украина, Польша ерҙәрен азат итеп, Германияға тиклем барып еттек. 1945 йылдың 26 апрелендә беҙ, 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәре, һулдан килгән 1-се Украина фронты менән ҡушылып, ҡамап, Берлинды штурмланыҡ. Утыҙында Рейхстагты ҡамап, 1 майҙа фашистарҙы баш һалдырҙыҡ.

Йәш быуын балалары беҙҙең инңә төшкән афәттәр тураһында китаптан, кинонан ғына ҡарап белә, тарих менән ҡыҙыҡһынмағандары бөтөнләй бер нәмә лә белмәй. Ләкин тарихты онотоорға ярамай, үҙ тарихын белмәгән халыҡ киләсәген дә күҙ алдына килтерә алмай. Тарихты боҙоп күрһәтергә тырышҡан кешеләр һүҙенә ышанып, үҙ асылыбыҙҙы юғалтыуға ла юл ҡуйырға ярамай. Инңә-иң терәшеп, бөтә милләттәр берләшеп, уртаҡ Ватаныбыҙ өсөн ҡан ҡойҙоҡ, нисек кенә ауырға төшһә лә, барыбер еңеп сыҡтыҡ. Шуны иҫтән сығармаҫҡа тейешбеҙ. Әҙәм балаһы ҡайһы мәлдә лә һуғыштың йәшәүҙе күҙ алдына килтерә алмай, был ябай халыҡ теләге түгел, ә аҡсаға, донъя менән идара итергә ынтылыусылар эше. Бөгөн дә донъяға баш булырға ынтылыусылар бар, Америка капитализмын күҙ алдында тотоп әйтәм. Ләкин беҙ шундай оло юғалтыуҙар кисереп яулаған тыныслыҡты һаҡларға, яҡларға тейешбеҙ. Йәштәр баш осондағы аяҙ күк йөҙөнөң ҡәҙерен белеп йәшәһен, күнелендә Ватанына, халҡына, ғаиләһенә һөйөү йөрөтһөн. Илдәр имен, донъялар тыныс булһын, тип теләйем.

**Камила ҒӘЛИВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔"Салауат Юлаев" хоккей клубы һаҡсы Александр Логинов менән килешеүҙе өҙҙө. Командан һөжүм итеүсе Дмитрий Саюстов та китте. Шулай уҡ юниорҙар араһында донъя чемпионатының бронза призеры (2016), 19 йәшлек һаҡсы Марк Рубинчик һәм 21 йәшлек һөжүм итеүсе Никита Ли менән килешеү төҙөү хаҡында билдәле булды.

✔Өфөнөң Ленин районындағы ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам итеү бүлегендә 3 йәшкәсә балаларҙы бушлай ҡарап торалар. Хеҙмәт өйҙә күрһәтелә. Балаңы социаль хеҙмәткәр менән 165 - 195 минутҡа (2,5 - 3,5 сәғәткә) һәм аҙнаһына ике тапҡыр ҡалдырырға була. Хеҙмәт менән файҙаланыу өсөн кәрәкле документтарҙы Ғафури урамы, 103 адресы буйынса Ленин районының Ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам итеү бүлексәһе хеҙмәтенә тапшырырға кәрәк. Телефон: 250-77-00.

✔Рәсәйҙә алдағы йәйҙә һауа температураһының норма тирәһе йәки унан юғары булыуы көтелә. Ошо хаҡта Рәсәй Гидрометүҙәк башлығы Роман Вильфанд хәбәр итә. "Рәсәйҙең Европа өлөшө үҙәгендә яуым-төшөм иҫәбе - нормаға яҡын, көньяҡта норма тирәһе һәм унан түбәнерәк булыуы фаразлана. Июль йылдың иң ямғырлы айы буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең Европа өлөшөнөң төньяғында яуым-төшөм етмәү ихтималлығы ҙур", - тине Гидрометүҙәк етәксеһе.

✔2019 йылда паспорт, пенсия һәм страховка таныҡлыҡтары мәғлүмәттәре туранан-тура идентификаторға бәйле булырға тейеш. Эксперттар һүҙҙәренсә, мәғлүмәттәрҙе берләштереү граждандарҙың дәүләт ойошмалары һәм банктар менән үҙ-ара эш итеүен ябайлаштыра. Ләкин берҙәм номерҙы индергәндә мәғлүмәттәрҙе фашлау хәүефе арта. Ваҡыт үтеү менән туранан-тура идентификатор граждандарҙың башҡа документтарын алыштырыр тип күҙаллана.

✔Архангел районында Башҡортостандың Экология министрлығы хеҙмәткәрҙәре ғәҙәти булмаған күренешкә шаһит булған: 30-лаған торна, ошо район аша осоп барғанда, ял итергә туҡтаған. Халыҡ һынамышы буйынса, уларҙың ҡайтыуы Башҡортостанда оҙаҡ көткәндән һуң көндәрҙең тиҙ арала йылыныуын белдерә.

**"Башинформ"дан.**

## ҠЫҪҠАСА



# ХӘСТӘРЛӘП...

✔ **Һупайлы биҫтәһендә Октябрь районының торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәткәрҙәре өсөн ятаҡ асылды.** Ул 20 ҡатлы йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан. Әлеге ваҡытта ятакта 6 ғаилә (12 оло кеше, 13 бала), 10 яңғыҙ хеҙмәткәр йәшәй. Буш ҡалған 14 урынға хеҙмәткәрҙәр яйлап урынлаштырыла. Һуңғы бер нисә йылда баш ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә ятаҡ йәки бөләкәй квадратуралы фатирҙар менән тәьмин ителә. Был тәжрибә үҙен аҡлай һәм хакимиәт кадрҙар хаҡында хәстәрлек күреп кенә ҡалмай, ә был һөнәрҙең абруйын да күтәрә. Быға тиклем бындай ятаҡтар Калинин, Ленин, Киров райондарында ла асылған.

✔ **Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 73 йыллығы алдынан һәм 8 майға тиклем Башҡортостандың күп функциялы үҙәгендә "Үлемһеҙ полк" акцияһында ҡатнашырға теләгәндәрҙе ҡабул итеү ойоштоорола.** Был көндәрҙә белгестәр теләгән кешеләргә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан туғандарының тарихын "Үлемһеҙ полк" электрон Хәтер китабына индерергә ярҙам итә, "Үлемһеҙ полк" акцияһында ҡатнашыу өсөн А4 форматындағы фотоһүрәттәрҙе сканерлай һәм баҫтырып сығара. Акция республика Күп функциялы үҙәгенең түбәндәге офистарында уҙғарыла:Өфө, Яңы Күпер урамы, 8; Өфө, Интернациональ урамы, 113; Өфө, Менделеев урамы, 205а; Өфө, Б. Бикбай урамы, 44; Өфө, Ғөбәйҙуллин урамы, 6; Өфө, М. Рыльский урамы, 2/1; Өфө, Менделеев урамы, 137, 4к; Өфө, Дағстан урамы, 2; Өфө, Г. Мушников урамы, 17; Өфө, Октябрь проспекты, 4/1; Стәрлетамаҡ, Хоҙайбирҙин урамы, 83; Күмертау, Ғафури урамы, 35; Октябрьский, Кортунов урамы, 15; Бәләбәй, Революционерҙар урамы, 3; Янауыл, Азин урамы, 29; Сибай, Горький урамы, 74к; Белорет, 5 Июль урамы, 3; Мәсғүт,Администрация И.Усов урамы, 3.

✔ **Башҡортостанда 11-30 майҙа Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы башланғысы менән "Таҙа яр" Бөтә Рәсәй акцияһы уҙғарыла.** Сарала ҡатнашыуға республика Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының янғын-ҡотҡарыу, авария-ҡотҡарыу бүлектәре, йәмәғәт, ирекмән, студент һәм ветеран ойошмалары, әүҙем граждандар, шулай уҡ студенттар һәм 10-11 класс уҡыусылары йәлеп ителә. Экологик акция һыу буйҙарында таҙалыҡ булдырыуға, йәмәғәтселек әүҙемлеген үҫтереүгә һәм тәбиғәтте һаҡлау сараларында ҡатнашыу аша балаларҙа һәм йәштәрҙә тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. "Уҙған йылдар тәжрибәһе күрһәтеүенсә, Башҡортостанда йәшәүселәр тыуған төйәгебеҙҙең тәбиғәтенә битараф түгел. 2017 йылда акцияла 11 525 кеше ҡатнашты. Республикала 347 һыу яткылығы таҙартылды", - тип хәбәр иттеләр Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостандағы баш идаралығының матбуғат хеҙмәтенән.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ФОНТАНДАР КҮҘҘЕ ИРКӘЛӘЙ



**Өфөлә фонтандар эшләй башланы. Ошо сараға бағышланған байрам тантанаһы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры эргәһендәге Театр скверында урынлашҡан "Ете ҡыҙ" фонтаны эргәһендә үтте. Ҡала халҡын Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, Киров районы хакимиәте башлығы Динар Хәлилов ҡотланы.**

Ҡала округы хакимиәте башлығы фонтандар миҙгелен асыу тантанаһының тап ошо майҙанда үтеүенең матур йолаға әүерелеүен билдәләне. Башҡорт бейеү сәнғәтенең иң камил өлгөләренең береһе - "Ете ҡыҙ" бейеүен кәүҙәләндергән фонтандың йәштәрҙе милли традициялар нигеҙендә тәрбиәләүгә ҙур өлөш индереүен һыҙыҡ өҫтөнә алды Ирек Ишмөхәмәт улы: "Тап ошондай ҡоролмалар үҙендең тамырҙарыңды оноторға ярамағанлығын хәтергә төшөрөп тора. Ҡалабыҙҙа бындай һәйкәлдәр тағы төҙөләсәк әле. Әлеге мәлдә Ленин исемендәге майҙанда "Сәғәт" тип аталған шартлы исем менән фонтан төҙөү эшен яңыртыҡ. Уға исемде ҡала халҡы менән бергәләп һайлаясаҡбыҙ. Фонтандағы һыу ағымы ваҡытты күрһәтеп торасаҡ. Йылдан-йыл Өфө үҙгәрә, йәшәү өсөн унайлы була бара. Республика хакимиәте ярҙамында Өфөнө Рәсәйҙең иң яҡшы ҡалаларының береһенә әйләндереү өсөн ҡала етәкселеге бөтөн көсөн һала".

Ирек Ялалов Салауат Юлаев исемендәге майҙандағы фонтанды асыуҙа ла ҡатнашты. Был объектҡа 2007 йылда нигеҙ һалынғайны, ул ике архитектура формаһын тоташтырып тора. Һыу баҫҡыстар буйлап ағып килеп, ҙур түңәрәккә ҡоя. Йөҙәрләгән һыу ағымы, каскадтар, сығанаҡтар бергәләп ҡурай сәскәһен барлыҡҡа килтерә. Ҡаланың бер үҙенсәлекле биҙәге булған фонтандарҙы асыу алдынан урамдарҙы ҡыш буйына йыйылған сүптән таҙартыу, ҡаланы тәртипкә килтереү ҙә йылдан-йыл киң билдәлелек алыуы тураһында һөйләне ҡала башлығы. Быйыл өмәләргә 200 мендән ашыу кеше сыҡҡан, улар араһында Өфө предприятиелары, учреждениелары, ойошмалары хеҙмәткәрҙәре, студенттар, уҡыусылар, бер сағыҙыуҙан да ситтән ҡалмаған ҡала халҡы ла бар. Дөйөм тырышлыҡ менән урамдар, майҙандар, баҡса һәм парктар, сквер һәм аллеялар таҙартылған. Өфө шулай матур төҫкә инеп, ситтән килгәндәр алдында йөҙ ҡыҙартмаҫлыҡ итеп, күҙҙәрҙе иркәләй бөгөн.

## ӘЙТӘГҮР!



### Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары тураһында нимә беләһең?

***Гүзәл Әхмәҙиева, уҡытыусы, Өфө ҡалаһы:*** Башҡорт халҡының Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшө ҙур. Һуғыш йылдарында башҡорт егете Шәкирйән Мөхәмәтйәнов батырлыҡ һәм Ватанға тоғролоҡ символына әйләнә, уның ҡаһарманлығын Башҡортостандың тағы бер данлы улы - Миңлегәли Ғөбәйҙуллин ҡабатлай. Дәрестә уҡыусылар менән генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов тураһында ла һөйләшәбеҙ. Уның туған теленән тыш, башҡа төрки, шулай уҡ рус, инглиз, ҡытай телдәрен яҡшы белеүе уҡыусылар өсөн матур өлгө, был турала ишетһәләр, аптырап китәләр. Бөйөк Ватан һуғышы мотор һәм машиналар һуғышы булған, тиһәләр ҙә, башҡорт атлыларының яу яланында күрһәткән ҡаһарманлыҡтары тураһында бөгөн дә легендалар йәшәй. Дондан Эльбаға тиклем 4 мең саҡрымдан ашыу юл үтә улар. Ошо дивизияла хеҙмәт иткән һәр яугир - герой. "Шайморатов генерал" йыры ла бөгөн киң таралған. Мәктәбебеҙҙең эргәһендә генә урынлашҡан "Аҡбуҙат" ипподромының Советтар Союзы Геройы Таһир Кусимов исемен йөрөтөүен, уның ниндәй ҙур батыр икәнен беләләр. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, шулай уҡ башҡорт улы Муса Гәрәевты ла йыш телгә алабыҙ. Һанай китһәң, был исемлекте әллә күпме дауам итергә булыр ине.

Тағы ла шуны әйткем килә: күптәр был һуғышта яҡындарын юғалта һәм бөгөн дә олатай-атайҙарының ҡәберен белмәүселәр, әммә табырға теләүселәр барҙыр. Минең ҡартатайым - өләсәйемдең атаһы Солтансәлим Ибраһимов Хәйбулла районы Аҡъюл ауылынан һуғышҡа китә. 1942 йылдың 9 майында Новгород өлкәһенең көсөргәнешле һуғыштар барған Иҫке Рамушево ауылы эргәһендә һәләк була. "Хәтер китабы"нда яҙылған адресты тапмағас, эҙләнеү эштәре алып барған активистарға мөрәжәғәт итеп, улар ярҙамында ҡартатайымдың исем-шәрифен туғандар ҡәберлеге исемлегендә таптым. Бөгөн мөмкинлектәр күп, интернет аша күп мәғлүмәт алырға була, шуға ла яҡындарығыҙҙы эҙләгеҙ, тип кәңәш итер инем. Беҙгә тыныс тормош бүләк иткән ҡартатай-олатайҙарбыҙҙың ҡәберенә барып баш эйеү - һәр кемдең изге бурысы ул.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Транспорт инфраструктураһы идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, "Трамплин" туҡталышы янында урынлашҡан канат юлы йома, 27 апрелдә, эшләй башланы. Бер йүнәлештә тулы билет - 40 һум, льготалы 20 һум торасаҡ, 5 йәшкәсә балаларға - бушлай. 10 килограмдан ауырыраҡ йөгө булған пассажирға уның өсөн 50 һум түләргә тура киләсәк.

✔"Рәсәй студенты-2018" Бөтә Рәсәй конкурсында республикабыҙ исеменән Башҡорт дәүләт медицина университеты студенты Эльвина Ғәзизуллина сығыш яһай. Эльвина - Бишбүләк районы ҡыҙы, Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетында өсөнсө курста уҡый. Биатлон менән мауыға. Ҡыҙ "Һылыуҡай-2018" республика гүзәллек конкурсында өсөнсө урынды алды. Финал 6 майҙа Новосибирскиҙа уҙа.

✔Өфөлә "Башнефть" компанияһының автозаправкаларында бензин һәм дизель яғыулығы йәнә ҡимmәтләнде. Хәҙер дизель яғыулығының литры 40,90 һум, АИ-92 - 37,90 һум, АИ-92 Atum - 38,50 һум, АИ-95 40,60 һум тәшкил итә. Бына алдараҡ Өфөлә "Лукойл" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡ арткайны.

✔Башҡортостанда урман янғындарын иҫкәртеү программаһы сиктәрендә 2018 йылда 8 маршрут буйынса 4,6 мең саҡрымдан ашыу оҙонлоктағы урмандарҙа авиация патруллек итеү күҙаллана. 1062 маршрут буйынса ерҙәге патруллек итеү 41 меңдән ашыу саҡрымды солғап аласаҡ. Ямғырлы йәй менән айырылып торған 2017 йылда республика биләмәһендә дөйөм 354,5 гектар майҙанда 38 урман янғыны теркәлгән - ул 2016-сыға ҡарағанда яҡынса 4 тапҡырға аҙ, майҙан буйынса икеләтә бәләкәй.

✔2017 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан эске туризм күләме буйынса иң яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән төбәктәр исәбенә инде. "Урал легендаһы" кластеры - Рәсәйҙең иң яҡшы биш туҙ санғыһы курорты исемлегендә, йәйгеһен "Яҡтыкүл" курорты айырылып торған. Былтыр республикала булып киткән туристарҙы иҫәпләү тамамланмаған әле, ләкин, яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, туристар ағымы 2016 йыл менән сағыштырғанда 15 процентҡа артҡан һәм һәм яҡынса 2 миллион кешегә еткән.

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

### Иҙрис бәйғәмбәр тарихы

Аллаһы Тәғәлә: "Эй, Бәйғәмбәр, кешеләргә Иҙрис бәйғәмбәр тураһында, ул бөтөн ғәмәлдәренә һәм һөйләгән һүҙҙәренә тоғро булды, уға бәйғәмбәр булыу даны тейҙе, Алла уны юғары күтәрҙе", тип һөйлә", - тигән. Аяттарҙа Аллаһы Тәғәлә Иҙристе сикһеҙ маҡтай һәм уны ғәҙел, тоғро бәйғәмбәр генә түгел, ә ихлас күңелле кеше булараҡ та матур итеп тасуирлай. Әҙәм менән Шиистан һуң Иҙрис өсөнсө бәйғәмбәр булған. Ул беренсе булып ҡәләм менән яҙған. Иҙрис бәйғәмбәр 308 йыл Әҙәм ғүмерен йәшәгән. "Алла уны юғары күтәрҙе", тигән аят һүҙҙәренә килгәндә, һүҙ Төнгө сәйәхәт һәм Күккә ашыу ваҡытында Алла илсеһе Мөхәммәттең Иҙрис бәйғәмбәрҙе күктең дүртенсе ҡатында күреүе хаҡында бара.

### Худ бәйғәмбәр

Ибн Ҡасир әйтеүенсә, Худ сығышы менән Аб ибн Аус ибн Сим ибн Нух тигән ҡәбиләгә ҡараған. Оман менән Хадрамаут араһындағы Йәмәндә йәшәгән был күскенсе ҡәбилә сатырҙар ҡороп, иркенлектә көн итергә яратҡан.

Туфан һыуы баҫҡандан һуң да боронғо әҙиттәр һынташтарға табына. Быны Худ бәйғәмбәрҙең: "Алланың һеҙҙән нисек итеп Нух халҡының вариҫтары яһауын һәм Нухты тыңламағас, Алланың уларҙы хаҡ юл төшөргә саҡырыуын кире ҡаҡҡас, һәләк итеүен, кәүҙәгеҙҙе буйға үҫтереп, физик яҡтан көслө итеүен, ҡулығыҙға власть биреүен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ", тиеүе Алланың уларҙы замандаштары араһында иң көслөләр итеүен аңлата. Алла: "Нухтан һуң беҙ икенсе ҡәбилә - ад ҡәбиләһен барлыҡҡа килтерҙек", тип Худҡа эйәргән халыҡ тураһында әйтә. Худ иһә кешеләрҙе һынташтарға түгел, ә берҙән-бер һәм бөйөк Аллаға табынырға өндәй, ләкин былар ҙа уны тыңларға теләмәй: "Беҙ еңеү һәм ашар ризыҡ һорап ялбарған һынташтарҙан Алланы өҫтөн ҡуйыусы һин - алйот һәм алдаҡсы", тип мыҫҡыллайҙар. Ә Худ бәйғәмбәр: "Эй, халҡым! Мин алйот та, алдаҡсы ла түгел. Һеҙҙе Алла юлына төшөрөргә, Алланың иманға саҡырыуҙарын еткереү бурысы менән ебәрелгән илсемен. Мин һеҙҙең тоғро кәңәшсе. Һеҙҙән мал да, байлыҡ та кәрәкмәй. Алланың мине барлыҡҡа килтереүе минең өсөн үҙе оло байлыҡ. Үҙегеҙгә нимә зыян, нимә файҙа килтереүен аңламаҫлыҡ кимәлдә алйот, аңһыҙ булырға тейеш түгелһегеҙ", ти. Худ бәйғәмбәр кешеләрҙең ялҡаулығына һәм иманға саҡырыуының төп асылын аңларға ла теләмәүҙәренә асыулана. Кешеләрҙең: "Эй, Худ! Һин өгөт-нәсихәттәреңдең ысын булыуын раҫлаған байраҡ менән килмәнең. Беҙ бер ваҡытта ла үҙебеҙҙең "аллаларҙы" ташлаямаясаҡбыҙ", тиеүе, йәнәһе, бәйғәмбәрҙең улар алдында өндәмәләре ысын булыуын раҫларлыҡ мөғжизә күрһәтә алмағас, һынташтарға ғына табыныуҙарын дауам итәсәктәрен аңлата. Улар Алланың кешеләр араһынан илсе ебәреүе идеяһын да кире ҡаға. Бәйғәмбәр: "Алдында йыйылып, тәртипһеҙлектәр ҡылырға яратҡан мөһабәт ҡоролмаларығыҙҙы маһайыусанлыҡта бер-берегеҙҙе уҙҙырыр өсөн генә ҡалҡыулыҡ һайын төҙөйһөгөҙмө ни? Донъялыҡта мәңге йәшәрбеҙ, бер ваҡытта үлмәҫбеҙ, тип, һоҡланғыс матур, мәғрур һарайҙар һалаһығыҙмы ни? Алланан ҡурҡығыҙ, уның асыуын алмағыҙ, миңә ышанығыҙ. Алла һеҙгә рәхәт йәшәр өсөн барыһын да булдырҙы бит", ти, күккә олғашҡан затлы һарайҙарҙан бер файҙа ла булмауын аңлатырға теләп. "Тәкәбберлегегеҙ һәм тиңе булмаған бөйөк Алланың хәҡиҡәтен кире ҡағыуығыҙ өсөн Унан яза аласаҡһығыҙ", ти, уларҙы иманға ҡайтара алмаясағына тамам өмөтө өҙөлөп.

Шулай итеп, Алланы инҡар иткән тәкәббер кешеләр Аллаһы Тәғәләнең Худ бәйғәмбәр үтенесе менән ебәргән ете көн буйы туҡтамаған үҙәккә үтерлек һалҡын, көслө елле ғәрәсәттә, сүп үләне кеүек туҙырап осоп, туңып үлеп бөтә.

**(Дауамы бар).**

*ИШАРА*

# КҮҢЕЛДӘРГӘ БЕР ҠЫЛ ТАРТЫЛҺЫН,

## илем, халҡым тигән изге ҡыл

**Күңелемде бушлыҡ биләп алмаһын, тип, саҡ ҡына ваҡыт тапһам, шиғырҙар уҡырға яратам мин. Улар йәнде дауалай, көс-ғәйрәт өҫтәй. Бына бөгөн ҡулыма Рәми Ғариповтың шиғри йыйынтығын алдым. "Бер ҡыл" шиғырынан өҙөктө күсереп яҙам:**



**"Бер көн килеп элекке бер дуҫым**
**Бөрөп алды шулай алҡымдан:**
**- Паганини ҙә бит түгелһең, - ти, -**
**Уйнайһың, - ти, - әммә бер ҡылда.**
**Ил дә тел тип ҡаңғырғансы,**
**Ҡалдырсы бер, иҫке бер ҡылды, -**
**Тигәс дуҫым, бер дошманым артты,**
**Ә күңелдә бер ҡыл тартылды!**
**Иҫке бер ҡыл! Изге бер ҡыл йәнгә!**
**Ул тартылған сәсән халҡымдан".**

Аҙағынаса уҡып сыҡтым да был шиғырҙы, китабымды ябып, бүтән эштәремде ҡулыма алдым. Үҙ тормошомдағы ваҡиғалар бер-бер артлы хәтерҙә ҡалҡып сыҡты. Шулай, икенсе синыфты тамамлаған көндө бер дуҫым янына килеп, күҙҙәремә ҡарап:

"Бер кешене һәр саҡ яҡлайҙар... "- тине лә, боролоп китеп барҙы. Ниңә был һүҙҙәрҙе әйтте икән дуҫым? "Бер кеше" ул кем икән, тип, коридорға сыҡһам, унда беҙҙең синыф ҡыҙҙары мәж килә, табелдән үҙҙәренең фамилияларын табып, билдәләрен ҡарайҙар. Уларға ҡушылып, мин дә үҙ фамилиям тәңгәленән билдәләремде эҙләйем: уҡыуҙы "дүрт" тә "биш" билдәләренә генә тамамлағанмын икән. "Дүрт"тәрем дә әҙ. Баяғы дуҫҡайымдың билдәләрен ҡараһам, уның "өс"тәре лә байтаҡ икән. Шунда, уҡытыусы ниңә мине яҡлай икән, тигән уй үтте башымдан. Беҙҙең бит беребеҙҙең дә ата-әсәһе юҡ, бөтәбеҙ ҙә бер төрлө, хатта кейемдәребеҙ ҙә бер төҫтә, тип уйландым, тик уйҙарымдың осона сыға алманым. Бик күп йылдар үтһә лә, күҙҙәремә ҡарап, бәреп әйтелгән һүҙҙәр онотолмай. Нисектер, еңел уҡыным мин мәктәп йылдарында. Әллә дәрестәрҙә уҡытыусыларҙы ихлас, иғтибар менән тыңларға яратыуым, әллә хәтерем һәйбәт булыуы быға сәбәп булғандыр, тип уйлайым.

Йылдар үтте. Уҡыным, эшләнем. Әле бик күп йылдар пенсияламын. Бер көн әхирәтем Фаягөл ҡунаҡҡа килде. Сәйҙәр эсеп, хәтирәләр сисеп ултырабыҙ. "Фаягөл, мин был һорауымды бер кемгә лә биргәнем юҡ ине, һинән һорайым әле. Училищела уҡығанда ҡыҙыҡ ҡына хәл булды: бер уҡытыусыбыҙ мине ситкәрәк саҡырып алды ла "Һинең талантың юҡ, һине Филипп Дмитриевич ярата, шуға һиңә "5" ҡуя. Ысын отличник түгелһең һин", - тип әйтеп, ары китеп барҙы. "Һинең талантың юҡ, белем байлығыңа таянып ҡына һәйбәт проекттар яһайһың", тип, бөтә курсташтарым алдында икенсе юлы тағы сәпәп әйтте. "Ниңә ул миңә ул һүҙҙәрҙе әйтте икән?" тип әле булһа уйланам", - тип, үҙемде күптән борсоған уйҙарым менән уртаҡлаштым.

Фаягөл рәхәтләнеп көлдө лә: "Ә минең талантым булмағас, ул һүҙҙәрҙе миңә әйтеүсе булманы. Юҡты юҡ тип әйтеүҙән ни файҙа, ә бына барҙы юҡ тип әйтеп, сағып алһаң, көнсөлдөң күңеле була", - тине.

Мин дә йылмайҙым. Күңелемдәге ауыр таш иреп юҡҡа сыҡты. Рәхмәт әхирәтемә. Ә мин ғүмерем буйы шул ябай һорауға ла яуап таба алмағанмын. Тик ауыр һүҙҙәр ишеткән һайын, мин тағы ла нығыраҡ тырышып уҡыным, эшләнем. Һуңлап булһа ла "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы" тигән исемгә лә лайыҡ булдым. Кешеләр бер-береһенә ауыр һүҙҙәрҙе сәмгә тейер өсөн әйтәләрме, әллә бөтөрөп ташлау өсөнмө икән? Ә мин ауыр һүҙ әйтеүселәрҙе тәрбиәһеҙ кешеләр тип ҡабул иттем. Тәрбиә етерлек кимәлдә бирелмәгән уларға. Мин үҙем уларҙы йәлләйем...

...Ә Рәми Ғариповтың баяғы шиғырына килгәндә, милләттәштәремдән күбеһе "илем", "телем", тип йәшәй, Рәми әйткәнсә, бер ҡылды тарта, көйләй. Беҙҙән һуң килгән йәштәр ҙә дауам итер уны, иншалла. Шағир әйткәнсә, "Яуҙар, мең ғазаптар арҡылы ул ҡыл үтеп ингән йөрәгебеҙгә". Шуға ла, бер ҡыл тартып, бер маҡсат менән йәшәгән туғандарҙың, милләттәштәрҙең бер-береһенең битен тырнамай ғына көн итеүҙәрен күрге килә.

# БӨТӘҺЕ ЛӘ ЯҠШЫРҘЫ...

## тип ишетке килә лә бит

**Үҙәк баҫмаларҙы ҡараштырып сыҡһаң, "Яңы завод төҙөләсәк", "Эш хаҡын арттырыу ҡарала", "Телефондан һөйләшеү арзанаясаҡ" тип уҡыйһың һәм үҙгәртеп ҡороу башланған йылдарҙа телеэкрандарҙан яңғыраған бер йыр иҫкә төшә. Иҫегеҙҙәме? Ҡалын тауыш:**
**"Здравствуйте, товарищи, начинаем**
**Программу телепередач на завтра, на завтра..."**
**Ә һуңынан нәҙек тауыш менән ҡушымтаһы китә:**
**"Нет, нет, нет, нет, мы хотим сегодня,**
**Нет, нет, нет, нет мы хотим сейчас..."**

Бөтәһе лә иртәгә, киләсәктә буласаҡ, тип йәшәнек. Социализм төҙөнөк, коммунизм төҙөргә хыялланып йәшәгәндә ҡапыл ҡырҡа артҡамы, уңғамы, һулғамы боролоп, капитализм төҙөй башланыҡ.

Хәҙер ғалимдар ҡатнашлығындағы тапшырыуҙарҙы йыш ойошторалар. Марс планетаһына осоу тураһындағы бер әңгәмәлә журналист: "Бына һеҙ Марста атмосфера ла, һыу ҙа бар, тинегеҙ, ә ниңә унда йәшәүсе юҡ һуң?" - тип һораны. Әллә был ғалимдың юмор тойғоһо бик юғары кимәлдә инеме икән, ул: "Сөнки бөтә Марс планетаһында аҙағынаса капитализм төҙөлөп бөткән, шуға унда йәшәйеш тә бөткән", - тип яуап биреп көлдөрҙө. Көлөрһөң дә: егерме йылдан артыҡ капитализм төҙөйбөҙ, ошо осорҙа әллә күпме матур һүҙҙәр һөйләнде, вәғәҙәләр бирелде, ә алға китеш юҡ. Эш хаҡы өҫтәлде, телефондан һөйләшеү арзанайҙы, тормош-көнкүреш яҡшырҙы, тип уҡығы һәм шуны тойғо килә лә бит. Белгестәр, үҙгәртеп ҡороу осоронда илебеҙҙең иҡтисады ярты быуатҡа артҡа ташланды, тип хәбәр итә...

Яһалма лозунгтар менән йәшәнек, улар әле лә бар инде ул. Иҫемдә, Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 30 йыл тулыуҙы байрам иткән йылдарҙа ГДР менән Башҡортостан дуҫ республикалар тип иғлан ителде. Хатта Өфөлә бер урамды "Галле округы урамы" тип тә атанылар. Дуҫлыҡ хөрмәтенә Башҡортостан Яҙыусылар союзынан бер төркөм делегация йыйҙылар. Шул саҡ бер яҙыусы: "Ни өсөн нәҡ башҡорттар унда барып дуҫлашып йөрөргә тейеш?" - тип һорарға баҙнат иткән. Ә етәкселәр: "Һуғыш ялҡыны Белоруссия, Украина ерҙәрен яндырып, көйҙөрөп үткән, ә Башҡортостан тыл булған бит", - тип аңлатма биргән. Яҙыусылар союзы делегаттары ГДР-ға барып ҡайтҡас, ул ерҙә тыуған шиғырҙарын радио аша уҡыны. Әнғәм Атнабаевтың бер шиғыры иҫемдә. Ул:

*"Ҡарт немецты күреп:*
*"Эй, немец бабай,*
*Быуындарҙан быуындарға*
*Дружить итәйек давай!.."* - тип яҙһам да, башымда: "Минең атайымды һин үлтерҙеңме?" - тигән һорау ҡалҡа ла сыға", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Һуңынан уға цензуранан ныҡ эләккән тинеләр. Эйе, уйларға мөмкин, ләкин әйтергә ярамай. Бына шулай, әйтергә ярамай, тип өндәшмәгән, битараф булған өсөн дә тормош артҡа тәгәрәгәнен берәй заман аңлармы икән кешелек?..

**Фәүзиә УСМАНОВА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Киске Өфө" гәзите ошо авторы - педагог, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы" Фәүзиә апай Усманова менән шул тиклем бәхетле. Ул гәзитебеҙ сыға башлағандың... икенсе һанынан алып беҙҙең алыштырғыһыҙ, тоғро авторыбыҙ һәм уҡыусыбыҙ булып ҡала килә, йәғни бына 16 йыл инде "Киске Өфө" биттәрендә "Фәүзиә Яхина", "Айгөл Ахунова" тигән ижади псевдонимдар аҫтында тәрән фекерле мәҡәләләре менән сығыш яһай. Ошондай яҡты күңелле, битафлыҡтан азат, ғәмле, талантлы авторыбыҙҙы 75 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ. Фәүзиә апайыбыҙға оҙон ижад ғүмере, ныҡлы сәләмәтлек, бәхетле көндәр теләйбеҙ.**

✓ Бәҙри Мәмбәтҡолов 60 йәштәрҙәге уҙаман булған ул мәлдә. Тыныс хеҙмәттә төүҙә балалар, һуңынан студенттар тәрбиәләүҙә ныҡышмалы хеҙмәте менән күп ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға, юғары наградаларға лайыҡ була.



МАТУР ХӘТИРӘ

**1970 йылдың сентябре. Беҙ, 120-нән ашыу егет һәм ҡыҙ, Сибай педагогия училищеһының 1-се курсында уҡый башланыҡ. "Б" төркөмөндә уҡыусы беҙ - башҡорт мәктәптәре өсөн буласаҡ башланғыс синыф уҡытыусылары, "а" төркөмөндә урыҫ мәктәптәрендә эшләйәсәк уҡытыусылар, ә инде "в", "г" төркөмдәрендә хеҙмәт, черчение уҡытыусылары әҙерләнә.**



# ЯУҘА СЫНЫҠҠАНДАР УҠЫТТЫ

Хәҙергә беҙ бик тырышып уҡып йөрөгән буласаҡ уҡытыусылар. Өҫтөбөҙҙә - аҡ яғалы мәктәп формаһы, оҙон сәстәр берҙән йә икенән үреләп, артҡа төшөрөлгән. Сәсенде рөхсәтһеҙ ҡырҡтырып ҡына ҡара - әсәйҙәр кәрәккә бирәсәк. Шау-гөр килә уҡыу йорто. Спорт залынан туп һуҡҡан тауыштар, физкультура уҡытыусыһы Йәнғәли Хәйбулла улының бойороҡтары, музыка бүлмәһенән пианиноға ҡушылып йырлаған матур йырҙар ишетелә. Ҡул хеҙмәте уҡытыусыһы Роза Кәлимулла ҡыҙы Исҡужинаның бик килешле костюм кейеп, тыҡ-тыҡ баҫып үтеп барыуы күбебеҙҙә һоҡланыу тойғоһо уята ине.

Көн һайын 6-8 дәрес уҡыйбыҙ, 3-4 пар. Асыҡҡан саҡтар ҙа булғыланы. Ярай әле, оҙон тәнәфес 30 минутҡа һуҙыла. Буфетта сиратҡа иң беренсе булып баҫыр өсөн берәй хәйлә табып, тәнәфескә алдараҡ сыҡһаң, шатлыҡтың сиге булмай. Шулай үҙ йүнеңде үҙең күрмәһең, 4 парҙы үткәреүе, ай-һай, ауырға төшә бит.

Нисек кенә булмаһын, уҡыу яғына килгәндә, тәртип бик ҡаты ҡуйылды. Дүшәмбе, шишәмбелә уҡыуҙар сәғәт 8-ҙә башланһа ла, берәүҙең дә һуңлап йәки алан-йолан ҡаранып, дәрестәрҙән ҡасып йөрөгәнен күрмәнек. Үҙҙәре балалар тәрбиәләйәсәк студенттар уҡыған ерҙә башҡаса нисек булһын! Тәнәфескә сыҡһаң инде, коридорҙарға һыймай йөрөр инек.

Даны алыҫтарға таралған был уҡыу йортона директорыбыҙ - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының элекке яугиры, эскадрон командиры, запастағы өлкән лейтенант Бәҙри Мөжәүир улы Мәмбәтҡолов етәкселек итте. Ошондай олуғ шәхесте көн дә күреп, һаулыҡ һорашып йөрөгәнебеҙҙе беҙ тәүҙәрәк белмәй ҙә инек. Училищеның актовый залында булды данлыҡлы директорыбыҙ менән яҡындан танышыуыбыҙ.

Бөтә уҡытыусыларыбыҙ ҙа тип әйтерлек Бәҙри Мөжәүир улының Бөйөк Ватан һуғышында күргән-кисергәндәрен тулҡынланып һөйләне. Ә унын менән оҙаҡ йылдар бергә эшләгән, беҙгә тәбиғәт, география фәндәренән белем биргән Т.А. Палагичева хатта күҙ йәштәренә лә ирек ҡуйҙы. Иң аҙаҡҡы булып Б.М. Мәмбәтҡолов үҙе һүҙ алды. Оҙаҡ ҡына һөйләне ул. Әммә үҙе тураһында түгел, ә яуҙаш иптәштәре тураһында һөйләне. Күбеһе Урал аръяғы райондарынан булған һыбайлы башҡорт яугирҙарының Днепрҙы аша сыҡҡандағы иҫ киткес ҡаһарманлыҡтары, Дон далаларында ҡылыстарын болғай-болғай дошман траншеялары өҫтөнән елдәй елеп үтеүҙәре, бер кавалеристың дөрләп янып торған кейеме менән фашист танкыһы өҫтөнә һикереп менеп, нисек итеп уны яндырыуы, үҙенең иҫән ҡалыуы тураһында ғорурлыҡ менән һөйләне Бәҙри Мөжәүир улы. Ә бына бер башҡорт яугирының ҡылыс төйҙәһе менән немец танкыһын туҡмағанын һөйләгәндә ул ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөрттө. Эскадронын әйҙәп, дошман танкылары өҫтөнә атакаға барғанын, йәиһә бер кавалеристың: "Командирҙар, ҡулға граната бирһәгеҙсе, исмаһам", - тип ҡысҡырғанын хәтеренә төшөргәндер директорыбыҙ ошо минуттарҙа.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 25 йылдан ашыуыраҡ ваҡыт уҙған, ә Бәҙри Мәмбәтҡолов 60 йәштәрҙәге уҙаман булған ул мәлдә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн өс Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған ҡыйыу кавалерист тыныс хеҙмәттә төүҙә балалар, һуңынан студенттар тәрбиәләүҙә ныҡышмалы хеҙмәте менән күп ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға, юғары наградаларға лайыҡ була. Бәҙри Мәмбәтҡолов Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып Константин Ушинский миҙалы ала, Ленин ордены менән наградлана. РСФСР-ҙың мәғариф отличнигы, Башҡортостандың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы исемдәренә лайыҡ була.

Бәҙри Мөжәүир улынан тыш, беҙҙе технология фәненән Әхмәт Әхмәт улы Ҡужахмәтов, математиканан Сәхи Вәли улы Бикҡолов, Шоғайып Закир улы Шаһимов атлы уттар, һыуҙар кисеп, Еңеү яулаған оло йөрәкле кешеләр уҡытты. Әхмәт Әхмәт улының да уң аяғы ҡалҡытып баҫҡан һайын дуға кеүек бөгөлөп, шығыр-шығыр иткән тауыш сығара торғайны. Хәтеремдә, Шоғайып Закир улы Калашников автоматын һүтеп, кире ҡорорға өйрәткәндә сал сәстәре һирпелеп маңлайына төшә. Ул башын еңелсә һелкеп кенә сәстәрен кире артҡа ташлар ине. Шундай шанлы, данлы һуғыш юлы үткән маһир, үҙ эшенә йәне-тәне менән бирелгән педагогтар уҡытты беҙҙе.

Сибай педагогия училищеһын тамамлауыбыҙға ла 40 йылдан ашыу ғүмер уҙҙы. Кешелеккә яҡты киләсәк яулап алыу өсөн ауыр һуғыш юлы үткән, ә тыныс тормошта фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөһө күрһәткән остаздарыбыҙ: Б.М. Мәмбәтҡоловты, Ш.З. Шаһимовты, Ә.Ә. Ҡужахмәтовты, С.В. Бикҡоловты ҙур хөрмәт менән иҫкә алабыҙ. Ерҙе иңләп оло байрам - Бөйөк Еңеү көнө килеп еткәндә, беҙ үҙебеҙ күреп белгән, китаптарҙан уҡып, кинофильмдар ҡарап таныған батыр йөрәкле ысын кешеләрҙе онотorға хаҡыбыҙ юҡ. Минә ҡалһа, беҙҙе уҡытыусы булырға өйрәткән үҙемдең уҡытыусыларым тураһында балаларыма, туғандарға һәм таныштарға һөйләгән саҡта оло ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм.

**Фәрзәнә ХАММАТОВА,**
**мәғариф ветераны.**
**Әбйәлил районы**
**Ишкилде ауылы.**

ХАЛЫҠ ТАУЫШЫ

# БАРАЙЫҠ, ЮЛЛАЙЫҠ

**Башҡорттар китте һуғышҡа,**
**Оҙатып ҡалды күк Урал,**
**Ат уйнатып алдан бара**
**Шайморатов генерал.**



Беҙ, һуғыш йылдары балалары, мәктәптә уҡыуҙы ошо йыр менән башланыҡ һәм ғүмер буйы сәхнәләрҙә лә, мәжлестәрҙә лә, походтарҙа ла ошоно йырлап үттек һәм тыуған илебеҙгә тоғро ҡалып, үҙебеҙҙе лә, балаларыбыҙҙы ла патриотик рухта тәрбиәләнек.

Тик мине, мине генә түгел, меңәрләгән башҡорт халҡын, бер ғәҙелһеҙлек - йәғни, үҙ илен һаҡлап, Өфөнән Берлинға тиклем барып еткән легендар кавалерия дивизияһының командиры - генерал Шайморатовҡа ошоғаса (үлгәндән һуң булһа ла) Советтар Союзы Геройы тигән юғары награданың бирелмәүе борсой. Әйткәндәй, унын дивизияһында ҡатнашҡан 78 һуғышсының был юғары исемгә лайыҡ булыуы башҡа бер хәрби ғәскәргә лә тәтемәгән.

Миңлеғәли Шайморатов 1943 йылдың 23 февралендә уны күрә алмаусы хәрби командирҙың күрәләтә үлемгә барырға биргән бойороғон үтәп, немецтарҙың төп көсөн үҙ яғына ылыҡтырып, меңәрләгән һалдат һәм офицерҙы ҡотҡарған. Тик унын шәхси документтарына "Хәбәрһеҙ юғалды" тип яҙыла. Ә бит хәбәрһеҙ юғалғандың сәбәбе көн кеүек асыҡ бындай хәлдә, үлемесле яра алғас, дошманға үҙенең үле кәүҙәһен дә бирмәҫ өсөн йә үҙен-үҙе яндырған, йә һыуға батҡан, шулайтып ҡына фаразларға мөмкин. Ул бит пленға эләкмәгән. Бер башһыҙ әҙәмдең "Хәбәрһеҙ юғалды" тип яҙыуына таянып, унын күрһәткән батырлыҡтары юйылырға тейешме ни?

Ошо мәсьәлә буйынса тәҡдим, тип әйтәйемме, фекер, типме, борон башҡорт зыялылары сетерекле хәлдәрҙе яйға һалыу өсөн батшаға барғандар һәм уртаҡ тел табып, хәл итеүгә өлгәшкәндәр. Әле лә республикабыҙҙың абруйлы кешеләренән делегация төҙөп, Владимир Путинға барырға кәрәктер, тигән үҙемдең фекеремде еткерәм һәм делегация составына үҙем белгән кешеләрҙең исемлеген тәҡдим итәм: Әмир Ишемғолов - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе; Илдар Марат улы Юлбарисов - "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы идараһы рәйесе; Йомабикә Ильясова - Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары; Ноғман Мусин - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы һәм башҡалар.

Әлбиттә, был бер ҡартластың фекере генә. Әгәр кемдер ошондай мәсьәләне хәл итеүҙе үҙ өҫтөнә алһа, улар үҙҙәре белә. Бәлки, республикабыҙҙың 100 йыллығы уңайынан, Башҡортостан халҡының күпселек тауышын яулаған Президентыбыҙ В. Путин был мәсьәләне хәл итеп тә ҡуйыр. Сәбәп ҡылғанға теләктәрен үтәрмен, тигән бит Аллаһы Тәғәлә.

**Сәләх ӘХМӘТОВ.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Троицкиҙа ете йыл уҡығандан һуң Зәйнулла Верхнеуральск өйәҙе Аҡҡужа ауылына имам итеп тәғәйенләнә. Бында ул үҙенең мәҙрәсәһен асып, уҡытыу эшенә тотона. Волга-Урал төбәгендә дөйөм ҡағиҙә булып киткән дини фәндәргә өйрәтеүҙе суфыйсылыҡ ғәмәленә ҡуша башҡарыу өлгөһөнә ярашлы, Зәйнулла Рәсүлев 1859 йылда Әбделхәким бән Ҡорбанғәли Сардаҡлы (вафаты 1872 йылда) етәкселегендә Нәҡшбәндиә йәмғиәте суфыйҙары сафына инеү маҡсатында Силәбе янындағы Сардаҡлы ауылына килә. Әбделхәким үҙе Ниязкули Хан Төркәмәниҙең башҡорттар һәм татарҙар араһындағы хәлфәләренең береһе Шәрәфетдин бән Зәйнетдин Эстәрлетамакиҙың (вафаты 1846 йылда) баш вариҫы була. Ниязкули Хандың силсиләһе (генеалогик сылбыры) Шәйех Әхмәт Сирхиндигә барып ялғана, шулай булғас, ул Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең Мөджәджидиә тармағына ҡарай. Әбделхәким Ҡорбанғәлиевтың Зәйнулла Рәсүлевтан башҡа бүтән күренекле уҡыусылары ла була: унан башҡа, Әбделхәким тағы биш хәлфәһен үҙенең вариҫтары итеп тәғәйенләй, уларҙың ҡайһы берҙәре Волга-Урал төбәгендә билдәле мөғәллим-суфый булып, танылыу таба.

1870 йылда Зәйнулла Рәсүлев, Әбделхәким Сардаҡлы тарафынан суфыйҙар йәмғиәтенә алыныуға ун йыл тулыуға, хажға китә. Рәсәй һәм Урта Азиянан килгән хаж ҡылырға барыусылар ғәҙәтенсә, бөйөк Ислам метрополияһы менән танышыу һәм бында мөғәллимлек иткән ғалим-ғөләмә менән аралашыу ниәтендә ул да юл ыңғайы Истанбулда туҡтала. З. Рәсүлев менән осрашҡан мөғәллимдәр араһында Нәҡшбәндиә суфыйҙар йәмғиәтенең Хәлидиә тармағын үҙ иткән шәйехтәрҙең иң арҙаҡлыларынан Шәйех Әхмәт Зияутдин Гумушаневи була. Әхмәт З. Гумушаневиҙың уға яһаған йоғонтоһо аҫтында З. Рәсүлев икенсе тапҡыр Нәҡшбәндиә суфыйҙары сафына алыу йолаһы аша үтеп, яңы остазынан Ә. З. Гумушаневиҙың шәхси ҡыҙыҡһыныуы предметы - хәҙистәргә (Мөхәммәт бәйғәмбәр әйткән һүҙҙәр) өйрәтеү хоҡуғын ала. Хиджазға китер алдынан З.Рәсүлев, үҙенең яңы етәксеһе менән рухи бәйләнеште нығытыу һәм Хәлидиә-Нәҡшбәндиә мистик йүнәлеше ысулдарын тулыраҡ үҙләштереү маҡсатында ҡырҡ көн Ә. З. Гумушаневи менән икәүҙән-икәү аулаҡта аралаша.

Хәлидиә, Нәҡшбәндиә суфый туғанлығының Мөджәджидиә филиалынан сыҡҡан бер тармағы булараҡ, унан әллә ни айырылмай; Хәлидиә-Нәҡшбәндиә суфыйҙары, рухи ғәмәлиәт менән шәриғәттең тығыҙ бәйлелеген танып, уртасыллыҡҡа баҫым яһай.

Ислам тәғлимәтендә яңы мистик йүнәлешкә нигеҙ һалыусы Мәүлән Хәлид Багдадиҙың үҙ ҡараштарын бик әүҙем пропагандалауы үҙе бер яңылыҡ була. Бер үк ваҡытта ул шәхсән үҙенә буйһонған, үҙәкләштерелгән һәм ҡаты тәртип урынлаштырылған дини йәмғиәт төҙөргә теләй. Яңы йәмғиәт төҙөгән заттың 1827 йылда вафат булыуынан һуң ошо йәмғиәттең ҡәтғи иерархиялы төҙөлөшө һаҡланмаған хәлдә лә, Хәлидиә Анатолияға, Курдистанға, Балканға, Сирияға, Ираҡҡа, Дағстанға, Малайзияға һәм Индонезияға бик тиҙ арала үтеп инеп, һәр ҡайҙа ла шәриғәт сиктәренән сыҡмаған, әммә һуғышсан рухтағы идеяларын тарата.

**(Дауамы бар).**

# КЕШЕ КЕШЕГӘ

## ул хеҙмәте өсөн халыҡ һөйөүен яулай ала,

**Халҡыбыҙҙың шундай әҙиптәре бар, улар менән һәр осрашыу - тарихи мәл. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Сөләймән улы Мусин. Уның редакцияға ҡунаҡҡа килеүен оло ваҡиғалай ҡабул итеп, йылы ғына диалог үткәреп, аҡһаҡал менән бер табында сәй эсеп, тирәләп ултырып фотоға төшөп ҡалдыҡ. Һөйләшеүҙе гәзит уҡыусыларыбыҙ менән дә бүлешәбеҙ.**

**Ноғман ағай, һеҙ бөгөн үҙегеҙҙе ниндәй статуста тояһығыҙ: ижад иткән яҙыусымы, ил тормошонда ҡайнашҡан аҡһаҡалмы, әллә хаҡлы ял тынлығы менән ләззәтләнеүсе оло кешеме?**

- Хәҙер, олоғайғас, вазифалар күбәйеп китте. Атаймын да, олатаймын да, пенсионермын да. Гәрәй Ҡыпсаҡ ырыуы аҡһаҡал итеп һайлап ҡуйған. Ә ижадҡа килгәндә, туранан-тура яҙыу эше менән булышмайым инде. Шуға үҙемде бөгөн яңы әҫәрҙәр ижад итеүсе яҙыусы тип әйтә алмайым. Проза ижадындағы хеҙмәттә күтәренке рух менән илһам ғына етмәй, бында мейене, хәтерҙе, белемде, һәләтте, тырышлыҡты, сабырлыҡты ауыҙлыҡлап эшкә егә торған ҡаты хеҙмәт ята. Бөгөн минә 88 йәш. Нисек кенә булһа ла организм арыған, уның ижади эшмәкәрлеге һығып тотонолған. Тәбиғәттә бөтә нәмә лә мәлендә, самаһында ғына емеш бирә һәм кеше лә шулай уҡ. Шулай ҙа был донъя ағымынан бөтөнләй үк төшөп тә ҡалмағанмын әле. Һуңғы йылдарҙа 11 томлыҡ "Һайланма әҫәрҙәр"ем донъя күрҙе. Мин уны 12 томлыҡ итеп әҙерләгәйнем. Әле шул һуңғы томының донъя күреүен көтәм.

Яҙған әйберҙәремде ҡабат-ҡабат уҡый, киренән тикшерә торған ғәҙәтем бар. "Һайлап алған яҙмыш"тың ете варианты булып, шуларҙы һаманғаса камиллаштырҙым. Унан "Мәңгелек урман"дың да өс вариантын ҡушып, Дәүләт музейына тапшырҙым. Былар барыһы ла ҡулдан яҙылғандар, шуларҙы ҡабаттан күсереп, өҫтәп, дөрөҫләп һалдым. Ошо хеҙмәттәр менән булышыу ҙа күңелемә рәхәтлек, һиллек килтерә.

**Яҙыусылар олоғайһа, мемуарҙар, көндәлектәр, хатирәләр яҙыуға әүҙемләшә. Ошо юҫыҡта һеҙҙән ниндәй иҫтәлектәр ҡаласаҡ?**

- "Һайланма әҫәрҙәр"ҙең 12-се томы - иҫтәлектәр. Тик улар биографик теҙмәләр түгел, үҙем тураһында ла түгел, ә минә яҡын булғандар, яҙмышыма йоғонто яһағандар тураһында. Унан әҙәби мөхит, әҙәби тормош, әҙәби тәнҡит хаҡындағы уйланыуҙарым да бар. 10-сы томда 17 яҙыусының ижади портреты һүрәтләнә. Һәм унда тик һынғай фекерҙәр генә лә теҙелмәгән, мин барыһын да үҙ күҙлегемдән тәнҡит аша үткәрәм. Йәшереп-батырмайса, ялағайланмайса, уратып-суратмайса бирҙем баштан үткән ваҡиғаларҙы. Әҙәби әҫәрҙәремдән тыш, ҡалдырыр иҫтәлектәрем шулар булыр.

**Ноғман ағай, яҙыусы булып формалашыу процесы нисек барҙы һеҙҙең? Ниндәй бала саҡ кисерҙегеҙ, ниндәй ғаиләлә үҫтегеҙ? Остаздарығыҙ кемдәр булды?**

- Бала саҡ... Уны һөйләһәң, һөйләп бөтөп булмаҫ. Мин ауылдан ун һигеҙ саҡрымда ятҡан Сауҡайорт тигән йәйләүҙә донъяға килгәнмен. Урман эсендә тыуғанмын һәм шуға ла ғүмер буйы урманды яҙғанмындыр.

Өс ҡыҙҙан һуң тыуған малайына атайым атҡа менгәндәй булып ҡыуанған. Әсәйем уның шул шатлыҡтан нишләргә белмәй ыуаланып йөрөгәндәрен ғүмере буйына матур хәтирә итеп һөйләне. Унан икенсе йылына тағын шул йәйләүгә сыҡҡандар һәм әсәйемдең: "Былтыр ошонда улыбыҙ тыуҙы бит",- тигәненән һуң, мине бер ерҙә лә һан итеп теркәтмәгәндәре ҡылт итеп иҫтәренә төшкән. Атайым һыбай ауылға киткән. Барһа, унда "Инде бер йыл үткән, улыдың быйылғы йыл менән яҙҙырабыҙ", тип, 1931 йылғы итеп теркәгәндәр. Шулайтып мин бер йәшкә "кесерәйеп" ҡалғанмын.

Ике йәштә атайымды юғалттыҡ. Урманда имән бағаналар ҡырҡып-тейәп ҡайтҡандан йығылған да, шул ҡазаланыуынан китеп тә барған. Уның атаһы - олатайым: "Үҙеге генә өҙөлөп әрәм булды улым", - тип иланы. Сәләмәт кеше булған ул, көрәшсе булған. Утыҙ бер йәшендә генә гүр әйәһе булып, әсәйем ғүмере буйы уның рухына тоғролоҡ һаҡлап, минә бауырын баҫты. Көслө рухлы, Ҡөрьәнде яттан белгән уҡымышлы, йүнсел ҡатын ине һөйөклө әсәйем мәрхүмә.

Апайҙарым тәрбиәһендә үҫеп, улар уҡығанды тыңлап, улар ҡулынан тартып алып, алты йәштә шатырлатып китап уҡып ултыра инем. Ә былай бәләкәйҙән ниндәйҙер илһам килде, һәләтем беләнде тип әйтә алмайым. Ғәҙәти ауыл балаһы булдым.

Беҙҙә һуғыштан алда ғына ете класлы мәктәп асылды. Йәштәр шуны тамамлай ҙа артабан бер ҡайҙа ла бармай ҡала ине. 1945 йылда мин етенсе класты осланғайным. Артабан уҡығы килде. Әсәйемә иплап кенә шул теләгемде белдерәм. Ул уйланып ултырҙы ла: "Атайың үлем түшәгендә ятҡанда "Улымды уҡыт, Вәсилә" тип әйткәйне шул", - тине. Минә тиклем утыҙ саҡрым аралағы Маҡарға барып уҡыған кеше лә булманы ауылыбыҙҙа. Хатта атайлылар ҙа уға ҡыйыулыҡ итмәне. Беренсе булып бындайға мин йөрьәт иттем. Иң ауыр ваҡытта, аслыҡ өҫтөндә, әсәйем билен һығыбыраҡ быуып, берҙән-бер улын белемле итергә ҡарар ҡылды. Өҫ-башта юҡ, булғаның ямап-тегеп, тәндә йыуыпкиптереп, булған ғына ризығын төрөп һалып сығарып ебәрә. Һәәй... шулай булды инде.

**Унан ҡала, институт, студент тормошо башланғандыр?**

- Юҡ әле, был арауыҡта минең бер тормош баҫҡысы булғандай бәләкәй генә йылым бар. Унынсыны тамамлағас, ауыл мәктәбенә уҡытыусы итеп алдылар. Улай-былай ғына ла түгел, физика-математиканы уҡыттым. Сентябрь айында уҡ директор саҡырып алды ла: "Ҡоҙаш ауылындағы уҡытыусы Фәғилә сирләгән, атаһы уны арбаға тейәп, Маҡар бальнисына алып киткән, һин шунда барып эшләп тор инде", - тине. Барҙым. Барһам, унда өс класс, өс класта ете бала. Уйлап ҡара, ете-һигеҙ генә өйлөк ауылда ла мәктәп бар! Ниндәй ауыр йылдарҙа ла шул белем усағын яптырманылар бит...

Класҡа барып инһәм, таҡта ла, журнал да, сәғәт тә юҡ. Беренсе синыфтың китаптары юҡ, үҙемдең тәжрибә юҡ. Ауылымдағы уҡытыусым Әминә апайҙан китаптар алып, дәрес пландарын күсереп, уҡыта башланым. Мәктәп тигәнем, ҙур булмаған өйҙәң бер яғы таҡта менән бүленгән бүлмә. Мин был яҡта уҡытам, теге яҡта Нәфисә тигән апай йәшәй, самауырын ҡуйып ебәрә, ҡыҙы Рәшиҙә минең яҡ бүлмәләге тимер мейес плитәһендә картуф өтә. Сәғәтебеҙ булмағас, күпме ултырғанды ла һиҙмәйбеҙҙер инде, балалар ялҡып китә лә: "Ағай, беҙ уйнап килайек әле", - тип сығып китәләр. Асыҡһалар: "Әйҙә ҡайтайыҡ - ашағы килә",- тиҙәр. Шулай уҡыу йылының апрель айына еткәс, мин кире ауылыма ҡайттым. Бәләкәс мәктәптең хужаһы ла, уҡытыусыһы ла булғанмын икән һәм минә, оло ҡыуанысыма, мул итеп эш хаҡы бирҙеләр. Өҫ-башты бөтәйтеп алдым. Бесән мәле тамамланғас, артабан уҡырға теләүемде тағы әсәйемдең иҫенә төшөрҙөм. "Нимәгә тағы, былай ҙа уҡытаһың бит", - ти әсәйем. "Юҡ, - мин әйтәм, - хәҙер фронтовик уҡытыусылар ҡайтты, белемһеҙ көйө йөрөү оят..."

Әлбиттә, Өфөгә уҡырға барғы килгәйне. Авиация техникумы, тигәнде эстән генә уйлайым да ул, тел менән әйтергә батырсылыҡ етмәй. Әсәйем: "Ул Өфөгә китһәң, ҡайталмайһың бит, мин ҡалайтып унда һине ебәрәйем, дүрт йыл буйына нисек итеп көтөп ултырайым", - тип илауланы. Был ваҡытта апайҙар кейәүгә китеп бөтөп, әсәй менән икәү генә тороп ҡалғайныҡ. Шулайтып, Өфө хаҡындағы хыялдарҙы тыйып тороп, Стәрләләге ике йыллыҡ уҡыуға индем.

Бая бирелгән "остаздар" тигәнгә лә яуап биреп китәйем. Стәрләлә Абдулла Баязитов тигән бик шәп башҡорт теле уҡытыусыһы уҡытты. Уның менән осрашҡанға һәм һабаҡтарын алғанға тиклем мин тел тураһында бөтөнләй уйланмағанмын да икән. Шул йылдарҙа туған телемә ҡарата бөтөнләй икенсе төрлө ҡараш барлыҡҡа килде. Ауылда бит башҡортса һөйләшеп йөрөйһөң, йөрөйһөң, уның ҡәҙере булырға тейеш икән тип башыңа ла килтермәйһең. Ә ул телдең нескәлектәрен, байлығын, тарихын өйрәнеү ҙә кәрәк һәм мөһим икән, бәҡтиһәң.

Әҙәбиәт уҡытыусыбыҙ Хәким Ғиләжев булды. Егерме алты ғына йәштә, пединститутты тамамлап ҡына килгән. Фронтовик! Сатан аяғында аҡһаҡлай биреп, таяҡ менән йөрөй. Һәр дәресе бер тамаша инде. Шиғырҙары гәзиттәрҙә баҫылған билдәле шағир уҡыта, тип, ауыҙҙы ла ябырға онотоп тыңлайбыҙ. Быны шул шәхес килеп, институтта быҒаса тыны Фатима, икенсеһе Франциска, хужаның үҙе менән аралашып, уларҙың һөйләгәндәренән һуштар китеп бөтә торғайны. Шул тарихты биш-алты битлек хикәйә итеп яҙып маташтым, әммә килеп сыҡманы, ойоштора алманым әҫәрҙе. Унан институттың профкомында, мәҙәни тормошонда ҡайнап йөрөп, арыуыҡ ҡына шиғырҙар сыймаҡланым. Һаман да проза өлкәһенә етди ҡарамайым әле.



Уҡыуҙы тамамлап, районға ҡайтып, мәғариф бүлеге инспекторы булып эшләй башлағас, ял булмаған эштәрҙе башлап ебәрҙе: әҙәбиәт түңәрәге ойоштороп, әҙәби гәзит сығарҙы, ижадҡа ылыҡтырҙы. Үҙе рәссам ине, гәзиттәргә һүрәттәрҙе ҡойоп ҡуя. Тәүге шиғырҙарымды ла ул яҙҙырҙы. Ә уға тиклем мин шиғыр яҙып ҡарау тураһында уйламай ҙа инем. Гәзиткә кәрәк, барығыҙ ҙа яҙаһығыҙ, тип ҡушты ла, арабыҙҙан ҡайныларыбыҙҙыҡын һайлап алды. Шулар араһына мин дә эләктем. Артабан ҡыҫҡынсы йылда бер шиғырҙарымды "Башҡортостан" гәзитендә баҫтырып, түбәмде күккә тейҙерҙе. Ошоларҙан сығып, мин шағир булырға ла, яҙыусы булырға ла хыял да итмәй инем, тип әйтмәксемен. Әлеге остаздарым ҡулында оҫта ҡулындағы балсыҡ кеүек әүәләнеп, формаға ултырҙым, төҫ-биҙәктәр алдым. Тимәк, һиңә ышаныусы, илһамландырыусы ла кәрәк ижадсыға.

**Ә проза йылғаһы ҡайҙан һәм ҡасан инеш алды?**

- Институтта уҡыған йылдарҙа яҙғы килә, шиғыр менән генә ҡәнәғәтләнеп булмай кеүек, ә тап нимәгә генә тотонорға белеп булмай. Уйлана торғас, беренсе яҙмаға һеҙгә таныш сюжетты һайланым: Ҡоҙаш ауылында уҡытҡанда "Һайлап алған яҙмыш"тағы немка, Сәйфетдин бабайҙар менән бергә йәшәгәйнем. Тәүге ҡатыны Фатима... көндәре буш булып, шунда уҡытыусылар тормошонан бер әйбер яҙҙым. Әммә уға ла артыҡ атлыҡмай ғына тотондом, ахыры, артыҡ уңышлы булманы. Унан, дүрт ай тирәһе эшләп ҡалдыммы, армияға алды ла киттеләр. Бына шунда, һағыныу шауҡымынанмы, әллә яны йәшәйеш, аралашыуҙар тәьҫиренәнме, хикәйәләр тыуа башланы. Яҙылғандарын Башҡортостанға - редакцияларға ебәреп торам. Улар "Әҙәби Башҡортостан", "Ленинсы" гәзиттәрендә баҫылып сыҡты. Минең шиғырҙарҙы ла, хикәйәләрҙе лә күҙәтеп барған Хәким Ғиләжев тағы ла дөрөҫ йүнәлеш биреп ебәрҙе шунда: "Ноғман ҡусты, һин - прозаик", - тине.

**Халыҡ яраткан, уҡыусы айырыла алмай уҡырҙай китаптарҙы ижад итеү өсөн яҙыусыла тәбиғи тел, уйлау, шуларҙы ҡағыҙға төшөрә белеү һәләтенән тыш, тағы ла ниндәй үҙенсәлектәр булырға тейеш? Хеҙмәт һәм тырышлыҡ тигән сифаттар әҫәрҙе яҡшыраҡ итә аламы? Һәм тағы ла, һеҙ дәүләт яҙыусыһы булдығыҙмы, әллә халыҡтыҡымы?**

- Мин дәүләт яҙыусыһы булманым. Күләмле әҫәрҙәремдән алып ҡарағанда, 1955 йылда яҙылған "Зөһрә" тигән повесым-

***✓ Кеше бөйөк булырға тейеш түгел. Ул хеҙмәте йәки батырлығы өсөн халыҡ һөйөүен яуларға мөмкин, әммә бөйөк була алмай. Кеше кешегә табынмаһын ул, был эш түгел. Яҙыусы итеп танығаН икән халҡым - шул еткән.***

# ТАБЫНМАҺЫН,

## әммә бөйөк була алмай

ды бик йылы ҡабул иттеләр. Әгәр шул саҡ уҡыусыларҙың минең яҙмаларҙы эҙләп уҡымағанын, бер-береһенән һорап алмағанын белһәм, аңғарһам, ҡабаттан ҡәләмгә тотонмаҫ та инем. Дәүләт һинең китабыңды сығарыр ҙа, ләкин уны уҡымаһалар, улар китапхана кәштәләрендә һаҡланып тора икән - ыҙалатма ла ҡағыҙҙы. Бәхетемә, халыҡ уҡыны - арттырыу юҡ. Уҡыусыларымдың һөйөүен тойоп йәшәнем, шуға ла илһамланып ижад иттем.

Яҙышыуға мин бик етди ҡараным. Әҫәр материалын ныҡлы өйрәнә, эстән уйлай йөрөй, етлектерә йөрөй инем. Унан отпуск, уға өҫтәп, ике-өс ай ял алып, ижад йортона китәм йәки өйҙә ултырам. Туҡтамай яҙа инем. Туҡтаһам, фекерем өҙөлә, уйҙарым тарҡала. Шунлыҡтан, шауҡымланып, был донъямдан айырылып, онотолоп, иләҫләнеп ижад иттем. Көнөм төнгә ялғанып, ашау-эсеү онотолоп, йонсоп-ябығып, хәлем бөтөп барып тамамлай инем әҫәрҙәрҙе.

"Мәңгелек урман"ды башта 1100 битлек бер китап итеп яҙғайным, проза секцияһында тикшерҙеләр ҙә, бик ҙур тарих, һин быны өс китап итеп яҙ, тинеләр. Мин ҡабаттан ултырҙым. Ошо әҫәр оҙайлы һәм ҡабат-ҡабат яҙылды. Унан "Һайлап алған яҙмыш"тың да яҙмышы һуҙымлыраҡ булды. Гәзиттә эшләгәндә лә ҡат-ҡат ултырып ҡарайым - юҡ, ваҡиғаларҙы бәйләй, йомғаҡлай алмайым. Төрлө алымдарҙа, юҫыҡтарҙа ҡағыҙға төшөрөп ҡараным. Шулай, тәүге вариантын килеп уҡынылар, тикшерҙеләр, нимәләр генә булманы! Сәйфетдин бабай иһә асыуланманы: "Ай, һин, шилма малай! Әллә нимәләрҙе яҙып бөткәнһең бит", - тип асыуһыҙ ғына көлдө. Үҙе уҡымаһа ла, немка ҡатынынан тыуған Фәрхиә исемле ҡыҙы уҡып һөйләгән икән. Бына шулай булды.

"Зәңгәр тауҙа аҡ болан" трилогияһы - ул һуғыштан алдағы, һуғыш ваҡытындағы минең тормош, унан ары ауылдаштарымдың йәшәйеше. Был әҫәремде баш күтәрмәй ултырып яҙып бөттөм, бер китабын хатта ай ярым тигәндә йомғаҡланым. Үрҙә әйткәнемсә, һығып алынған лимон хәленә ҡалып. Мәскәү эргәһендәге ижад йортонда инем ул мәл. Ҡан баҫымым ныҡ төштө. Укол һалдырып, Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡып ятҡан Рәшит Солтангәрәев янына киттем. Аяҡтарымды саҡ һөйрәп килеп йығылдым. Тейешле дауаның дарыуҙарын таба алмайбыҙ, ул ваҡытта аптекалар хәҙергеге һымаҡ иркен һатыу итмәй. Шул мәл яҡут яҙыусылары килеп инеп, шуларҙың береһе сығып китеп, ҡайҙалыр нимәләрҙер вәғәҙә итеп, һатып алып килде уколдарҙы. Егеттәр бер аҙ хәл индергәс, Өфөгә ҡайтып етер көс таптым. Ҡайтҡас, ай ярымға дауаханаға эләктем. Ҡыҫҡаса аңлатҡанда, минең ижад итеү процесым ошолайыраҡ булып бөтә ине. "Арып киттем әле, ял итеп алайым", тигән һүҙҙе түгел, уйҙы ла рөхсәт итә алманым яҙыуҙа. Әммә үкенмәйем.

- Һәр хәлдә, кәмһетеп ҡарамайым. Тиң итеп, хөрмәт итеп, ҡайһы берҙәренә һоҡланып та ҡарайым. Һоҡланам, сөнки ҡатын-ҡыҙ булып, ижадҡа тоғро ҡалыу бик ауыр хәлдер, тип уйлайым. Иренә, балаларына, донъяһына, эшенә бүленгәндән һуң, улар тағы ла яҙышыуға ла көс түгә бит. Айырма, әлбиттә. бар. Ул шулай булырға тейеш тә. Ир менән ҡатын араһында, уларҙың уй-кисерештәре араһында айырма булған кеүек. Уларҙы хатта сағыштырып йәки уҙыштырып маташырға ла ярамай. Был - урынһыҙ.

Заманында Таңсулпан Ғарипованың хикәйәләрен уҡып әҫәрләнгәйнем. Уларҙы тикшереп, китап итеп сығарҙым да, почта аша һалып ебәрҙем. Алып, аптырап киттем, тип һөйләне аҙаҡ. Күреп торам, был шундай нескә тойомло, һәләтле яҙыусы. Ул тулыһынса ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте, энергетикаһы менән һуғарылған. Унан Тәскирә Даянованың "Һуңғы шырпы" тигән әҫәрен уҡып, яҙманың "егеттәрсә" икәнен тойҙом. Бер осрашыуҙа танышам - йомшаҡ ҡына холоҡло ҡатынҡай. Ошолай ҙа булырға мөмкин, тимәк. Бында барыһын да әҫәр, шул әҫәрҙе ижад иткәндәге авторҙың кисерештәре хәл итә, ә авторҙың ниндәй енестән булыуы түгел. Нескә генә ҡатын-ҡыҙ ижадсы ла көслө рухлы, ныҡ характерлы булып, ошо һыҙаттарын әҫәрҙәрендә сағылдыра ала. Ҡарап торғанда тау шикелле ир-егет яҙыусының яҙмаларында ла ҡатын-ҡыҙ психологияһы

китте. Унан ай ҙа йөрөмәй, вафат булды ла ҡуйҙы. Терһәгемде тешләрҙәй булдым... Нимә тип был эшкә тотонғанмын? Ниңә әсәйем янында булмағанмын? Ниңә? Нимәгә? Ни эшләп?.. Ә бит әсәйем тырышмаһа, мин бер кем дә булмаҫ инем... Иң ҙур үкенесем шул.

**Ә һеҙҙең ошондай шауҡымлы ижадсы булғанығыҙҙы аңланылармы өйҙә?**

- Фәймә апайығыҙ үҙе 25 йыл Республика китапханаһында эшләне. Хаҡлы ялға сыҡҡас та шунан китә алмай ҡаңғырҙы. Ул үҙе китаптар менән шауҡымланған кеше ине. Уҡымаған, белмәгән әҫәре булманы. Балаларҙы ла шулай өйрәтте, улар минең өҫтәл артына ултырып, эшкә тотоноуымды күреү менән янымдан китәләр, ҡамасауламайҙар ине.

Әҫәр өсөн эҙләнеүҙәр, аралашыуҙар юллап йөрөгәндә лә, онотолоп яҙғанда ла, шулар өҫтөндә борсолоп, кәйефһеҙерәк, иғтибарһыҙыраҡ булып киткән саҡтарҙа ла үпкәләгән, шелтә белдергәне булманы ғаиләмдең. Ә бит ижадсы өсөн был бик мөһим. Хатта ки оло бәхет тип әйтергә була. Эйе, бәхет ул ижадсының яҡындарының аңлауы, нисек бар - шулай ҡабул итә белеүе.

2003 йылдың март айында Фәймә апайығыҙ инсульттан һуң аяҡтан яҙҙы. Миңә етмеш тулып үткәйне. Һәм шул саҡта минең ижади эшләүем дә туҡталды. Апайығыҙ туғыҙ йыл түшәктә ятты. Ярты йылдан оло ҡыҙым ауырып китеп, ике йыл дауахана-

тикшереүгә ҡуйғайным, проза бүлегендәге фронтовик яҙыусылар: "Немецтарҙың тормошон бөтөнләй белмәйһең, һуғышты ла өҫтән генә күрһәтәһең",- тинеләр. Улар бит һуғышта булған, барыһын да үҙҙәре күргән кешеләр, уларҙы алдап булмай. Ҡабаттан ултырып ҡарайым - юҡ. Шул мәл ГДР-ға барыу мөмкинлеге сығып, атлығып шунда юлландым. Немец ҡалаларында, ауылдарында булып, йәшәйештәрен күреп, үҙҙәре менән аралашып, әллә күпме эмоциялар алып ҡайттым. Әҫәрҙә ҡулланған һәм шундай дөрөҫлөктәр биргән бәләкәс деталдәрҙе лә таптым. Мәҫәлән, ауыл хужалығында ҡулланылған "Клайны темпа" тигән өс тәгәрмәсле бәләкәс йөк машинаһы булһынмы, "Витат" тигән фашистик рухтағы немец йәштәре журналы булһынмы - барыһы ла китапҡа фактик материалдар булып инеп китте. Хайде Леньгельбах тигән бер рус теле уҡытыусыһы менән танышып, ул ата-әсәһенең тормошон һөйләп, әллә күпме мәғлүмәттәр бирҙе. Унан аҙаҡ та ул ханым менән хат алыштыҡ, минең ҡыҙҙар аралашты.

Ошо сәйәхәттән һуң, ҡайттым да, беренсе һүҙенән башлап өрәңынан яҙҙым әҫәрҙе. Бөтөнләй икенсе ҡараш, икенсе алымдар менән. Китап сыҡҡас, уны "геү"

**Әсәйегеҙ һеҙҙе яҙыусы буларак ҡабул иттеме? Нисек ҡараны ул улының яҙышыуына?**

- Армиянан һуң мин уны тағы яңғыҙ ҡалдырып, Өфөгә эшкә киттем. Бәйләнеш тоттом, иғтибарымдан мәхрүм итмәнем, тик ул ғына етәме һуң? "Эй, улым, ҡасан рәхәтләнеп бергә йәшәрбеҙ инде?" тип әйтеп ҡуя ине. Ҡалаға ла күсереп ала инем, тик түҙмәй бит бында ауыл кешеһе. Ҡыш уртаһында ҡайтырға йыйынып китә торғайны. Яҙышыуымды ла шул айырылышыуҙың сәбәпсеһе итеп күрҙе шикелле. Яҙыусы булмай, уҡытыусы булһа, ауылда бергә генә йәшәр инек, тип өмөтләнгәндер...

Армиянан ҡайтыуымды ла бик ашҡынып көттө. Ә мине Өфөлә һалдат кейемендә көйө редакцияға эшкә алып ҡалдылар. Алабарман йәш баш менән тот та эш башла. Әсәйҙең хыялдары, уйҙары нисек, тип тә һорама...

Илле етенсе йылдар, инде китаптар ҙа донъя күреп торғас, аҡса ла еткәндәй булғас, ижад менән генә шөғөлләнергә, әсәй янында булырға булып, эштән дә киткәйнем. Телевидениеға саҡырҙылар. Әҙәби тапшырыуҙар программаһын юлға һалайыҡ, тип, ныҡ ҡына ҡоҙалап саҡырҙылар. Шунда барҙым бит әллә нишләп. Ул арала әсәйем ауырып

ларҙа йөрөп, донъя ҡуйҙы. Шул саҡ минең йыһан менән тоташҡан илһам каналым өҙөлдө, әлеге эмоциональ стрестар томаланы. Уйлап ҡарайым - уйланылмай, яҙырға теләк юҡ.

"Алдар батыр" тарихын өйрәнгәндә унан алда булған бер шәхесебеҙ - Сәйет батыр тураһында бай материал туплағайным. Тарихын теҙеү, яҙыу системаһын теҙмәгә һалғайным, планлаштырғайным. Тик ошо фажиғәләр булып, мин был әҫәрҙе яҙа алманым. Унан йәштәргә тәҡдим итеп тә ҡараным, әлегәсә тотоноусы юҡ - быныһы икенсе үкенесем булды.

**Ноғман ағай, һеҙ башҡорт халҡы өсөн үҙегеҙҙең геройҙарығыҙ Төлкөсура, Алдар батыр кеүек үк легендаға әйләнгәнегеҙҙе аңлайһығыҙмы? Нисек ҡабул итәһегеҙ был мәртәбәне?**

- Бер нисек тә ҡабул итмәйем. Кеше бөйөк булырға тейеш түгел. Ул хеҙмәте йәки батырлығы өсөн халыҡ һөйөүен яуларға мөмкин, әммә бөйөк була алмай. Кеше кешегә табынмаһын ул, был эш түгел. Яҙыусы итеп танығаН икән халҡым - шул еткән. Китаптарымды уҡыйҙар икән - ҙур бәхет. Артығы кәрәкмәй ҙә.

**Прозаик ир кеше буларак, ҡатын-ҡыҙҙар ижадына нисек ҡарайһығыҙ? Айыраһығыҙмы уны ир-егеттәр ижадынан?**

ярылып ята. Бирелеп ижад иткән саҡта яҙыусы үҙ геройҙарының тиреһендә була белергә, улар күңелендә "йәшәп" сығырға тейеш. Шулай булмағанда, уҡыусыны ла ышандырып булмаясаҡ. Ижад бит ул бик ҡатмарлы нәмә, уны һүҙ менән һөйләп аңлатып та булмай. Бары тойған әҙәм генә аңлар.

**Бөгөн йыш ҡына оло быуын вәкилдәренән үткән һәм хәҙерге заманды сағыштырып шелтәләү ишетергә мөмкин. Мәҫәлән, "бына беҙҙең заманда эшләйҙәр ине" йәки "ул саҡта шундай яҙыусылар бар ине" һ.б. Нисек уйлайһығыҙ: заман йомшарҙымы, әллә халыҡмы?**

- Һәр замандың ауырлығын һәм рәхәтен шул заманда йәшәгәндәр генә белә. Бына һеҙ һуғыш йылдарындағы бала тормошон кисермәгәнһегеҙ һәм уны күпме генә тыңлап-уҡып ҡараһағыҙ ҙа, бөтә асылында аңлай алмайһығыҙ, шулай бит. Шуның кеүек, оло быуын вәкилдәре лә бөгөнгө һеҙ ҡаршы торған проблемаларҙы тейешенсә итеп, һеҙ тойғанса итеп ҡабул итә алмай. Үпкәләү ҙә, шелтә лә, тәнҡит тә урынһыҙ бында. Заман да, уның йәшәүселәре лә икенсе замандан аҡылһыҙыраҡ йәки аңһыҙыраҡ, ялҡауыраҡ йәки эшлекһеҙерәк була алмай. Заман ул йәшәйеш, ул үҙгәреп, үҫешеп, яҡшымыяманмы алға китеп бара. Уны һис кенә лә туҡтатып булмай. Һәм шул заман үҙ йәшәүселәренә төрлө һынауҙарын, шарттарын, ваҡиғаларын биреп кенә тора.

Яҙыусы өсөн илендә, йәшәгән донъяһында ҙур ваҡиғалар, хатта фажиғәле ваҡиғалар булыуы ла илһам сығанағы ул. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа бер төркөм фронтовик яҙыусылар ижад итте. Уларҙың темалары иңләп-буйлап бөтөрлөк түгел ине. Беҙҙең быуын яҙыусылары ла һуғыш төтөнөн еҫкәгән, күптәренең атайҙары, ағайҙары ятып ҡалған, уларға һуғыш зәғифләгән яҙмыштар таныш. Беҙ бармаҡтан һурмай ғына аныҡ хәл-ваҡиғаларҙы яҙа, һүрәтләй алдыҡ. 1956 йылда, мәҫәлән, Яҙыусылар ойошмаһында 47 яҙыусы иҫәпләнә, уларҙың барыһын да беләләр, уҡыйҙар ине. Яҙыусы исеме юғары баһаланды, әммә ул исемгә лайыҡ булыу өсөн һәләттән тыш, ҙур хеҙмәт тә кәрәк ине.

Бөгөнгө яҙыусыларға ла еңел түгел. Улар заманында ла ваҡиғалар аҙ түгел, фажиғәләр ҙә етерлек, әммә ул ваҡиғалар бөйөк түгел. Шулай уҡ авторҙар үҙҙәре лә артыҡ әллә нимә кисермәгән. Әлбиттә, һәр кемдең шәхси яҙмышы төрлөсә, ауырлыҡтар үткәне лә бар, тик былар бөйөк ваҡиға була алмай. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө йәш быуын уҡыусыһына беҙҙең замандың бөйөк ваҡиғалары ла артыҡ тәьҫир итмәй. Тимәк, нисек кенә булғанда ла, һәр быуындың үҙ әҫәрҙәре һәм уҡыусылары булып тора. Был тәңгәлдә төрлө быуын вәкилдәренә бәхәсләшеү урынһыҙ.

**Ижади аралашыуа һыуһайһығыҙмы бөгөн?**

- Һыуһап кителә... Әлбиттә, аралашыр яҡындар бар, әммә фекерҙәш, ауаздаш кешеләр етешмәй. Ундай дуҫтарым китеп бөткән, тигәндәй. Элек бит беҙ, яҙыусылар, ғаиләләр менән аралаштыҡ, беҙ һөйләшә, ҡатындар өҫтәл әҙерләй, балалар бергәләшеп уйнап йөрөр ине. Ялдарҙы бергә үткәрҙек, яҙғандарыбыҙҙы ҡысҡырып уҡып ишеттерҙек, кәңәшләштек. Ниндәйҙер яҡынлыҡ, туғандарса тартыу булды. Хатта бер генә күргән таныштарға ла балаларҙы эйәртеп бара ла инә инек йә улар беҙгә килеп төшә. Ә бит фатирҙарыбыҙ ҙа берәр бүлмә генә, тигәндәй. Хәҙер туғандарға ла шылтыратыуһыҙ барыу ғәйеп һанала, хәл белеү бөтөнләй буш менән булашып йөрөү кеүек. Бер мәл: "Әйҙә, ҡунаҡ саҡырып алайыҡ әле",- тип, саҡырып та ҡараным яҡындарҙы, һәр кеменең үҙ мәшәҡәте булып, кемдәрелер сәбәпһеҙ ҡунаҡты аңламай булып, бик аҙы ғына килде. Унда ла оноҡҡанда бер күрешкәс, үҙ-ара тартыныу, шикләнеү бар ине. Беҙҙең ваҡытта бит ҡунаҡтан баш тартыу әҙәпһеҙлек һаналды. Ары күңелем һүрелде был ҡунаҡ саҡырыуҙан да...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеүҙән һуң да ҡапыл ғына ебәрә алманыҡ әҙипте. Һәр кемдең дә уның менән бер-ике ауыҙ һүҙ аша булһа ла аралашҡыһы, иҫтәлеккә фотоға төшкөһө килде. Әле оҙаҡ ҡына уның янында шаулаштыҡ. Был ысынлап та тарихи мәл булды...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Мәғлүмдер ки, һәр ауылдың үҙ мәрәкәсеһе була. Уны хатта ауыл Хужа Насретдины тип тә йөрөтәләр. Ундай кешеләрҙең күптәре: "Тукта әле, кешегә бер ҡыҙыҡ яһайым. Көлөшөп алһындар әле," - тип әйтеп тә тормай. Юҡ, киреһенсә, уларҙың етди ҡыланыуы ла, шапырына биреп, булмағанды булды, тип, яһап һөйләүе лә көлкөгә сәбәпсе булыусан. Бына шундайҙарҙың барыһын да көүҙәләндереүсе яҡташтарым хаҡында бер ике кәлимә.**

# ҺАЛДАТ ӘКӘМӘТТӘРЕ,

## йәки Кирам ағай менән Әхмәтулла ағайҙың һуғыш хәтирәләренән

### Кирам ағайҙың түҫнәй ваҡытты түҫнә әйткәне

Беҙҙең ауылдың күршеһе Иҫке Монасип (Һарт) тигән ауылда Исмәғилев Кираметдин тигән ағай бар ине. Аҙаҡ мәғлүм булыуынса (ысынмылыр, бушмылыр), һуғышта ул ерләү (похоронный) командаһында хеҙмәт иткән. Әммә яуҙан ҡайтҡас (яңылышмаһам, яраланыпмы, нисек, Еңеүгә тиклем үк ҡайтып, ферма мөдире булып эшләй ине), бынан тегеһен дә, быныһын да һорашалар, яу хәлдәрен белешәләр. Ул ваҡытта ауылда радио юҡ, ысвит юҡ, сәғәт юҡ. Бөтә яңылыҡты килгән-киткәндән дә, үткенсенән һәм телефонлы кәнсәләрҙән белешеп тора халыҡ. Кирам ағай яуҙан ҡайтып төшкәс, ауылда быны ҙур ваҡиғалай күреп, былай тип һөйләнгән халыҡ:

- Ул һуғыштан кеҫә сәғәте алып ҡайтҡан...

- Уның ҡул сәғәттәре лә бар икән...

Тура килгәнендә, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, ауылдаштары бынан ваҡыт һораша икән. Әллә ҡайҙан уҡ ялтырап күренеп торһон өсөн, еңе төрөлгән беләгендәге ат башындай ҡул сәғәтенә ҡарап ала Кирам ағай:

- Аһ, быныһы туҡтаған, ахырыһы, - тип кәләфейенең сәғәт һала торған кеҫкәй кеҫәһенә тығыла. Унан сылбырлы сәғәт сығарып, ҡарап ала ла:

- Атаҡ, быныһы артта ҡалған икән, - тип ҡуя, ти. Шунан инде ваҡыт һорауысыға һыртын ҡуйып, эске салбарының кеҫәһенә тығыла, унан - өсөнсөһөнә. Һуғыштағы хеҙмәтенең хикмәте: сәғәттәре һанынса кәләфейе, кәләфейе һанынса - сәғәте. Һуңғы сәғәтен һелкеп-һелкеп тора ла:

- Әллә контузия ғәләмәте, әллә ни. Заводить итергә онотола ла ҡуйылына, - тип, һуңғы сәғәтен иң эстән кейгән салбары кеҫәһенә тыҡҡас, ҡояшҡа күҙ һалып:

- Түҫнәй ваҡыт - бер! - тип ҡуя торған булған, ти (немецтың штамплаҥған сәғәттәрен йыйған да йыйған имеш, ағайыбыҙ).

### Кирам ағайҙың Кутузов менән бергә хеҙмәт иткәне

Һуғыш хәлдәре хаҡында һүҙ сыҡҡанда, шыттыра биреп һөйләргә әүәҫ икәнен белеп алған егеттәрҙән береү:

- Кирам ағай, һуғышта күпте күргән кешеһең, - тип һалпы яғына һалам ҡыҫтыра биреп, һүҙ башлауға, Кирам ағай:

- Күреләнде инде, күреләнде, - тип ҡуя икән, тамағын ҡыра биреп.

- Кутузовты күрергә тура килмәнеме?

- Кәк тура килмәһен! Шәп кеше ине. Осраған һайын: "Йә, Кирам ағай, хәлдәр нисек? Еңгәй хат яҙамы? "- тип һорашып тора торғайны. - Урыҫ булһа ла, уҙ башҡортондан артыҡ ине...



- Теге, Верховныйҙың йөҙ грамын да бергә күтәргән сағыңыҙ булғандыр әле?

- Бына һинең менән мин ултырған һымаҡ яҡын ултыр ҙа, кәк булмаһын! Булды. Ҡайны ваҡытта; "Кирам ағай, килеҥдә уйҙап, эс бошоп китте әле", - тип, Верховныйҙан үҙенә тейгән өлөштө лә минең кружкага ҡоя ла: "Йә берҙе йырлап ебәр әле, яратам мин башҡорт йырҙарын", - тигән булыр ине. Мин ҡайтҡанда, илап тороп ҡалды, бахыр...

Шулай итеп, Кирам ағай улай-былай ғына кеше түгел ине. Уның хеҙмәттәше Кутузов булған, Кутузовтың серҙәше Кирам ағай үҙе булған.

### Әхмәтулла ағайҙың әфисәрский повар булғаны

Һуғыштан һуң колхоз эше менән ҡырҙа яҭҡандамы, ҡайҙа, беҙҙең Нәбиҙән Хисмәтуллин Әхмәтулла ағай нәүбәт буйынса әҙерләгән аш-һыуҙы ауыҙ иткәндә, егеттәр быны бик маҡтай икән.

- Ошо Әхмәтулла ағай әҙерләгән аш гел тәмле була ул.

- Телеңде йотторо п, өнһөҙ ҡалдырмалы инде!

- Аштың ашы кем ҡулы тейеүгә ҡарай шул ул!

- Ә кәк же, әфисәрский повар дәрәжәһенә тиклем үрләгән кеше әле ул был дәдәгеҙ, - тип әйтер булған дежур ашнаҡсы бындай саҡта. Йүкә шына үҙенең тәьҫир итеү һәҙәмтәһен күрһәткән саҡтарҙа Әхмәтулла ағай ашнаҡсы бурысын нәүбәтһеҙ ҙа аткарыр булған ...

### Әхмәтулла ағайҙың осоусы була яҙғаны

- ...Шулайтып, һуғышып йөрөп ятыла. Бер мәлдә миңә хәбәр итәләр, комполканың связноййы һине эҙләй, - шулай тип башланы, ти, Әхмәтулла ағай сираттағы яу хәтирәләрен.

- Шунан, шунан, - тиҙәр икән егеттәр.

- Шунан ни, бойороҡ бирәм: "Әйтегеҙ унда! Керһен, рас мине эҙләгәс".

Керә связной:

- Иптәш Хисмәтуллин, һине срочно штабҡа саҡырталар, - ти, честь биреп тороп.

Барҙым штаб тигәндәренә. Ҡараһам - күм-м-ә-ә-к йыйылышып киткәндәр. Аҡ халатлылары ла бар. Петлицаһына генерал йондоҙо таҡҡандары ла бар. Генералдарҙың өс йондоҙлоһо үҙе тороп күреште лә:

- Йә, иптәш Хисмәтуллин, хеҙмәт барамы? Йонсотмаймы, асыҡтырмаймы?

- Никак нет! - тим. "Йонсорға ваҡыт юҡ әле ул, немец теңкәгә тейә", тип әйтергә итәм дә ул, тартындыра. Не положено, етмәһә. Оҙон тәбәрәккә төшөп, гәпләшер ваҡыт түгел.

Шунан былар минең иңемде, буйымды, ауырлығымды үлсәп тороп, ҙу-у-ур ҡаҙан эсенә ултырттылар. Шул хәтлем ҙур ул ҡаҙан. Әгәр унда аш бешерһәң, ошо беҙҙең өс ауылдан торған Сталин колхозы халҡы туйыр ине. Шул арала күмәкләп тороп тотондолар бит былар ҡаҙанды өйрәлтергә. Эй өйрәлтәләр, эй өйрәлтәләр. Шунан һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?

Шунан тағы тотондо былар өйрәлтергә, шунан тағы һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?

- Юҡ, - мин әйтәм.

- Улай булғас, һин лутщик, иптәш Хисмәтуллин! - тинеләр.

- Слушаюсь! - тигән булдым генералға.

- Шунан, шунан?

- Шунан ни, һуғыш ҡыҙып китте. Минең ҡайғым да онотолдо, ахыры. Тегеләй булһа, бер нәмә итеп, яраплан менән ҡайтып төшөләнә ине, ҡустылар, Нәбигә...

### Әхмәтулла ағайҙың Гитлер менән осрашҡаны

Әхмәтулла ағай һуғышта күпте күргән. Хатта Гитлер менән осрашҡан кеше ул. Был турала бына нисек һөйләр булған ул.

... Немецты өтөп алып киттек бит инде бер ваҡыт. Көнөн-төнөн ҡыуылына был кафырҙы. Һыпырталар ғына. Шулайтып, Берлинға ла барып инеләнде. Кругом - атыш та ҡыҫҡырыш. Тегенән дә аталар, бынан да, ҡыйыҡтан да, аҫтан да. Бер мәл атыш бәләкәй тымғайны, кит тә бар мин теге Рейхстаг тигәндәрен ҡарарға. Политруктар аңлатҡандан белəм бит инде. Ул где-то Центрҙа булырға тейеш. Тик яңылышмаҫҡа ғына кәрәк. Ҡала һиңә - ауыл түгел. Өйҙәрҙә бер-береһенә оҡшатып һалалар. Рейхстаг тигәне кеүек йорт та булыуы бар бит. Ҡалайтһам иттем, немецтең бер гәзитенең өҙөгөн табып алдым. Ҡараһам, мин эҙләгән йорттоң һүрәте тора. Карта буйынса бараммы ни! Һүрәтте тотоп алынылған, китеп барылына, китеп барылына, туктамайса һис тә һис. Таныным бит тегене. Хәҙер уратып ҡарап йөрөйөм быны, ҡарап йөрөйөм. Шулайтып, ҡарап йөрөһәм, бер тимер ишек күреп ҡалдым. Асып ебәрһәм... һыртын ҡуйып, Гитлер тора. Миндә эше лә юҡ, ҙур бер тимер һандыҡтан икенсе тимер һандыҡҡа аҡса бушатып тора. Аҡсала эш юҡ. Эстән генә: "Әһ-һә, эләктеңме, спулыш!" - тип, тегенең ата-инәһен дә телгә ал да мин, бара килеп бының к...тенә тип тә ебәр! Типкән ыңғайға, теге кәксәйеп китте лә башы менән оло тимер һандыҡты төкөнө. Кәксәймәҫ ерҙән кәксәйерһең! Төкөмәҫ ерҙән төкөрһөң! Һуғыш башындағы кеүек обмоткалы ботинка түгел ине шул ул ағайыбыҙҙың аяғында. Әфисәрский күн итек. Етмәһә, уның өр-яңы сағы. Дағалы ла ине. Мин типкәс, теге ништәй инде? Әбижәтсә итә: "Ошо Хисмәтуллин булһа, к...тҡә тибер ҙә йөрәр ул!" - ти.

Типтем шул. Ҡайҙа тибергә һорап тора буламмы?!

**Бөрйән районы Иҫке Монасип һәм Нәби ауылдарында ишеткәнен, Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ яҙып алған.**

ӘЙТӘГҮР!



### Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары тураһында нимә беләһең?

***Гөлгенә Ҡунаҡкилдина, уҡытыусы, Баймаҡ районы:*** Илебеҙ тыныслығы, беҙҙең азатлығыбыҙ өсөн ғүмерен биргән һәр яугир күңелдәребеҙҙә. Атайым, билдәле ҡурайсы Кәрим Мөхәмәҙиә улы Дияров та Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, фашист илбаҫарҙары менән аяуһыҙ көрәшә. 1942 йылдың июлендә һуғышҡа китә ул. Бөрө ҡалаһындағы хәрби училищены тамамлап, десант гвардия батальонында радист, снайпер һәм парашютсы булып хеҙмәт итә. Латвияла булған йән тетрәндергес бер алышты һөйләгәне хәтерҙә ҡалған: "1943 йылда Воронеж фронтының Букринский плацдармында бик ҡаты алыштар булды. Днепр йылғаһының һул ярында совет ғәскәре, ә уң яғында - фашистар. Беҙҙең ғәскәр йылғаны төнөн сығырға булды. Тик таң атыуға фашистар быны һиҙеп ҡалып, самолеттар менән һөжүм итте. Ҡаты алыш башланды. Ошондай шарттарҙа командование дошман тылына һикерергә бойороҡ бирҙе. Беҙ йылға аша сыҡҡан беҙҙең һалдаттарға һөжүм иткән фашистарҙың юлын бүлергә тейеш инек. 298 самолеттан 4575 кеше парашют менән һикерҙек. Шулай уҡ 660 ҡумта боеприпас ырғыттылар. Беҙ, десантсылар, дөм-ҡараңғы төндә, билдәһеҙлеккә һикерҙек. Бәләкәй төркөмдәргә берләшеп, плацдармдың алғы өлөшөн алырға тейеш инек". Әммә зенит уты аҫтына эләккән летчиктар алынған курстан ситкә тайпыла. Һөҙөмтәлә, десантсылар Днепр өҫтөнә төшөрөлә һәм күбеһе һәләк була. Бик һирәктәре генә үҙ яғына төшөп һибелә. "Ҡуйылған бойороҡто үтәү өсөн берләшергә кәрәк икәнен аңланыҡ. Рация аша хәбәрләшеп, 40 кешегә яҡын кеше бер отрядҡа йыйылдыҡ һәм фашистарға һиҙелерлек юғалтыуҙар килтерҙек", - тип һөйләр ине атайым. Фашистар десантсылар менән һуғышып 4 көнөн юғалта. Был мәлдә Букринский плацдармына 40-сы армия үтеп инә. Совет һалдаттарының батырлығы юғары баһалана. 2000 һалдат, сержант, офицер орден-миҙал менән наградлана, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булғандар ҙа бихисап була. Наградалар төп көс килеп еткәнсе плацдармды тотҡан өсөн бирелә. Десантсыларҙың ҡаһарманлығы бер ерҙә лә иҫкә төшөрөлмәй һәм баһаланмай.

Атайымды Горький ҡалаһына уҡырға ебәрәләр. Махсус курстарҙан һуң ул самолет-штурмовикта радист, снайпер, парашютсы була. "Сумкамдағы ауыр рация, автомат, һалдат кәрәк-яраҡтары 40 килограмға барып етә ине", - тип хәтерләр ине атайым. Шулай итеп, ҡала-ауылдарҙы, илдәрҙе азат итеп, Германияға барып етәләр. Атайым бер мәл ватылған фашист самолетын ҡарап йөрөгәндә ҡурай диаметрындағы алюмин торбалар күреп ҡала. "Әһә, быларҙан ҡурай эшләп булмаҫмы икән?"-тип уйлай ул. Атайым тиҙ генә өс быуынлы ҡурай эшләп тә ала. Ялға туҡтаған ваҡытта ҡурайҙа һыҙҙырып уйнай, иптәштәре рәхәтләнеп бейей. Йәнгә үтеп инерлек моң, дәртле көйҙәр менән ул барыһын да рухландыра. Атайым шул алюмин ҡурайын тотоп Башҡортостанына ҡайта. Ул музыка ҡоралы уның күнелен йыуатҡан, Еңеү ышанысын һеңдергән.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



## МӘКТӘПТӘРГӘ... йога дәресе

■ Ғәҙәттә табиптар йөрәк сирлеләргә кофеинлы эсемлектәрҙән баш тартырға кәңәш итә. Австралия тикшеренеүселәре билдәләүенсә, көнөнә 3 сынаяҡ ҡара сәй йәки ҡәһүә эсергә мөмкин. Бының сәләмәтлек өсөн бер хәүефе лә юҡ. Етмәһә, был эсемлектәр аритмиянан, инсульттан һаҡлай. 228 мең кеше ҡатнашҡан һынауҙар күрһәтеүенсә, даими рәүештә ҡәһүә эсеүселәрҙә йөрәктең тирбәлеү аритмияһы 6 процентҡа һирәгерәк осраған. Көнөнә 353 мг кофеин ҡабул иткән кешеләрҙә йөрәк ритмы тигеҙләнгән, йөрәк сирҙәре лә күҙәтелмәгән. Ҡыҫҡаһы, аритмия менән яфаланыусылар өсөн көнөнә 300 мг кофеин эсеү ҡурҡыныс түгел. Белгестәр фекеренсә, кофеин үҙәк нервы системаһын стимуллаштыра, ҡайһы бер ауырыуҙарҙан һаҡлай.

■ Бөгөнгө заман сире - депрессия ғаилә ҡороп йәшәүселәрҙә һирәк осрай икән. Тик уларҙың йыллыҡ килеме 60 мең долларҙан кәм булмаҫҡа тейеш. Ошондай уҡ күләмдә аҡса эшләгән, әммә ғаиләһе булмағандарҙа депрессия билдәләре йышыраҡ күҙәтелә. Джорджия университеты ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 24 йәштән 89 йәшкә тиклемге кешеләр ҡатнашҡан. Улар көн дауамында бер нисә тапҡыр һорауҙарға яуап биргән. Түбән һәм уртаса килемле кешеләрҙе депрессиянан ғаиләһе һаҡлауы асыҡланған. Экспертар билдәләүенсә, ғаилә ҡорғандан һуң социаль ярҙам һәм матди килем кеүек социаль ресурстар берләшә. Аҡсаны күп табыусыларҙың былай психик сәләмәтлеге зарланырлыҡ булмай. Ә бына аҙ килемгә эшләп йөрөүселәр өсөн ғаилә ағзаларының рухи ярҙамы үтә мөһим. Ғаилә ошо матди бушлыҡты тултыра икән.

■ Мәктәп программаһына йога индерергә кәрәк, тигән фекерҙә Тулейн университеты ғалимдары. Ул балаларға стресс менән көрәшергә ярҙам итәсәк. Һынауҙар өсөнсө кластарҙа үткән. Уҡыу йылы башында уҡыусыларҙа тынғыһыҙлыҡ билдәләре асыҡланған. Һуңынан уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр. Контроль төркөм 32 баланан торған һәм улар мәктәп психологы менән аралашҡан. 20 бала 8 аҙна буйына йога менән шөғөлләнгән. Улар тын алыу гимнастикаһын яһаған, тынысландырыусы күнекмәләр эшләгән. Икенсе төркөмдөң һөҙөмтәләре күпкә яҡшыраҡ булып сыҡҡан. Уҡытыусылар ҙа йоганың ыңғай яҡтарын билдәләгән.

■ Фаббинг - әңгәмә ваҡытында гел гаджетында соҡоноу ғәҙәте. Бэйлор университеты тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, фаббинг кеүек ғәҙәткә эйә булыусыларҙың яҡындарының стресс һәм депрессия кимәле юғары. Сөнки эргәңдәге яҡын кешеңдең һиңә иғтибар бүлеү урынына телефонына ғына ҡарап ултырһа, кешелә хәүеф тойғоһо ҙурая. Белгестәр 330 кеше менән аралашып, уларҙың яртыһының фоббинг менән яфаланыуын асыҡлаған. Улар смартфоны менән көнөнә 1,5-2 сәғәт ваҡытын уҙғарған. Социаль селтәрҙәр генә лә 90 минут тирәһе ваҡытты алған. Яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө был ваҡытта социаль селтәрҙә яңы дуҫтар табыуға һәм улар менән аралашыуға бүлгән. Фаббинг кеүек заман сиренә дусар булғандар үҙҙәре социаль селтәрҙәр йәшәү сифатын күтәрҙе тип иҫәпләй. Ә ғалимдар был тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе менән ҡәнәғәт түгел. Башҡалар компанияһында булғанда смартфондарҙы бөтөнләй тыйырға кәрәк, ти улар.

ЯУГИР МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# "ХӘҠИҠӘТ ЯҠЛАУҺЫҘ ҠАЛЫУҘАН ҠУРҠАМ..."

**"Һуғыш - ул китаптарҙа яҙылған, киноларҙа күрһәтелгән күренештәр һәм ваҡиғалар, ниндәй техника ҡулланыу, стратегия, тактика ғына түгел. Һуғыш - ул ҡот осҡос мәхшәр. Уны бер нисек яҙып та, күрһәтеп тә аңлатып булмай. Яҙылғандар, күрһәтелгәндәр - улар цензура аша үткәндәре генә. Ә үтмәгәндәре? Минең дә "Шла на фронт девчонка" китабыма күп нәмәләр инмәй ҡалды. Шулай ҙа, мин унда һуғыш ваҡытында ҡыҙылармеецтарҙың көндәлек тормошо, уларҙың ниндәй шарттарҙы үтеүе, алыш тынып торған арала ла тормошҡа балалар күҙе менән бағып, матурлыҡты күреүҙәре хаҡында яҙырға тырыштым", - тип хәтирәләре менән бүлешә әңгәмәсем - 15 йәше тулмаҫ элек ут эсенә инеп, тыныс тормошта бар ғүмерен журналистикаға бағышлаған, 93 йәшкә аяҡ баҫҡан Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, бөгөн Өфөлә йәшәгән Галина ОСТАШЕВСКАЯ.**




**➔ Галина Андреевна, һуғыш һеҙҙең ғәмһеҙ үҫмер ваҡытығыҙҙы урлап, тормошоғоҙҙо "һуғышҡа тиклем" һәм "һуғыштан һуң", тигән осорҙарға бүлгән. Барлыҡ хыялдарығыҙ селпәрәмә килгән көндө бер ваҡытта ла онотоп булмайҙыр, моғайын...**

- Ул көндө мин әхирәтем Настя менән күрше ауылда концертта ҡатнашырға тейеш инек. Үҙебеҙҙең ауылда (Украинаның Хмельницкий өлкәһе Фридриховка ауылы) мәктәп ете йыллыҡ ҡына булды, шуға күрә белем алыуҙы унда дауам иттек. Иртән Волочиск станцияһының клубында буласаҡ репетицияға сығып киттек. Барып етеүгә күктә геүләү тауыштары ишетелә башланы, ергә төшөп бомбалар ярыла. Беҙҙе клуб бинаһынан бер ҡайҙа ла сығармайҙар. Тирә-яҡ бер аҙ һил булғас, ишектәрҙе астылар, беҙ әхирәтем менән ауылға йүгерҙек - бөтөн ерҙә емереклек, самандан эшләнгән йорттарҙан бер нәмә ҡалмаған, бөтөн ерҙә ҡыйыҡтарға ябылған һаламдар туҙышып ята. Ихатаға килеп инһәм, унда әсәйемдең йәнһеҙ кәүҙәһе... Артабан нимә булғанын хәтерләмәйем. Ихатала ҡоҙоҡ бар ине, сик буйы яҡын булғас, сигенеүсе сик һаҡсылары ҡоҙоҡто күреп, йыуынырға, һыу эсергә тип ингән һәм минең саҡ беленгән пульсым аша тере икәнлегемде асыҡлап, иҫемә килтергәндәр. Улар әсәйемде ерләргә ярҙамлашты. "Мине лә бергә күмегеҙ", - тип илайым... Командир: "Бында ҡалыу хәүефле, беҙҙең менән барырһың", - тип, үҙҙәре менән алып китте. Шулай итеп, 15 йәшем дә тулмаҫтан, фронтҡа эләктем. Мәктәптә уҡыған медицина нигеҙҙәре курсы белеме менән шәфҡәт туташы булып, яралыларға ярҙам иттем.

**➔ Тәүге ярҙам күрһәтеү тәжрибәгеҙ булған, тимәк...**

- Нисек ярҙам иткәнмендәр - аңлата алмайым. Дарыуҙар, ҡорамалдар юҡ, шәфҡәт туташының сумкаһында бинт та, йод ҡына. Шуға ҡарамаҫтан, ул ваҡытта медицина хеҙмәткәрҙәре йылы һүҙ, кешелеклелек, яҡшы мөнәсәбәт менән дә яугирҙарҙың рухын күтәргәндер, тип уйлайым. Бөгөн генә ул медицинаны аҡса һауыу өсөн файҙаланалар. Йыһаздар, хеҙмәтләндереү - заманса, әммә пациенттарға, бигерәк тә оло йәштәгеләргә ҡарата кешелеклелек, йылы мөнәсәбәт юҡ. Бәләкәй генә буйлы, сибек булыуыма ҡарамаҫтан, яу яланынан яралыларҙы сығарыу, уларға тәүге ярҙам күрһәтеү, санчастҡа оҙатыу минең бурысым ине. Бынан тыш, хатта разведкаға йөрөргә лә, "тел" алырға ла тура килде. Быға немец телен бик яҡшы белеүем ярҙам итте. Ә разведкала тел белгән һалдат - үҙе ярты еңеү.

**➔ Үлем ҡурҡытманымы?**

- Һуғышта иң ҡурҡынысы - әсиргә эләгеү. Әсиргә эләгеүгә ҡарағанда үлеүең мең артыҡ. Сөнки 1943 йылда

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың икенсе ысулы: "Үҙеңдең ихтыяжыңды контролдә тоторға өйрән"

Икенсе дәресте Аркад ошо һорауҙан башлай:

- Кисә һеҙҙең кемегеҙҙең көшөлөгө буш ине?

- Барыбыҙҙыҡы ла, - тип яуаплай класс.

- Ә барығыҙ ҙа төрлөсө аҡса эшләй. Берәүҙәр - аҙыраҡ, икенселәр - күберәк. Ҡайһы берәүҙәрҙең ярҙамға мохтаж ғаиләләре бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һеҙҙең көшөлөктәр бер төрлө буш булған. Ә хәҙер мин һеҙгә шундай хәҡиҡәт әйтәм: әгәр ҙә һеҙ быға ҡаршылыҡ күрһәтмәһәгеҙ, сығымдарығыҙ һәр ваҡыт һеҙҙең тотоноуҙар менән ярышып үҫәсәк.

Ике төшөнсәне бутамағыҙ: һеҙҙең тейешле тотоноуҙарығыҙ һәм һеҙҙең теләгегеҙ. Һәр берегеҙҙә эш хаҡығыҙ ғына ҡәнәғәтләндерә алмаған теләктәр күп. Шуға ла һеҙ уларҙы ҡандырыуға барлыҡ аҡсағыҙҙы тотонаһығыҙ. Унда ла әле ҡандырылмаған әллә күпме теләгегеҙ тороп ҡала.

Бойомға ашмаған теләктәр улар миндә лә бар. Әллә һеҙ мин бай булғас та барлыҡ теләктәремде лә ғәмәлгә ашыра барам, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул. Сәбәптәре бик күп. Мин ваҡыт менән сикләнгәнмен. Минең физик көсөмдөң дә сиге бар. Мин сәйәхәт итә алған һәм алмаған аралар йыраҡлығы бар. Унан һуң, минең ашай алыуалмау мөмкинлегем дә сикләнгән. Шулай уҡ тормош менән һоҡланыу, шатланыуҙың да үҙ самаһы бар.

Әгәр ҙә игенсе баҫыуҙа сүп үләненең тамырын ҡалдыра икән, ул барыбер үрсейәсәк. Шуның һымаҡ, теләгеңде ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеге бар икән, улар артасаҡ ҡына. Тимәк, теләктәр күп, ә ҡандыра алырҙайҙары күп түгел икәнен һәр саҡ иҫтә тотоғоҙ.

фронттың теге яғынан да хаттар, хәбәрҙәр ала башланыҡ. Уларҙа фашистарҙың совет һалдаттарын һына түгел, ябай халыҡты нисек интектереүе, мыҫҡыл итеүе тураһында белдерәләр ине. Һуғыш өлкәнәйтһә ла, барыбер хисле ҡыҙ бала булып ҡалғанмындыр, күрәһең. Почта бәйләнеше булдырылғас, һалдаттарға өйҙәренән хаттар яҙалар, минә яҙырға бер кемем юҡ. Башҡалар хат уҡығанда, мин һәр ваҡыт илай торғайным.

➔ **Бөгөн йәшәү өсөн шарттар, уңайлыҡтар булған һайын кеше йышыраҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдерә, булғанына шөкөр итергә онота. Һеҙ кисергәндәргә бөгөн хатта ышанмауҙары ла мөмкин…**

- Тәүҙә мин пехотала хеҙмәт иттем, фронттың алғы һыҙығында булдыҡ. Ҡоралланыу, кейем, ашау - бөтөн нәмә наҡыҫ. 10 һалдатҡа - бер мылтыҡ. Дошмандың танкыларына ҡаршы мылтыҡ тотоп барырға тура килә. Бармаҫ инең, арттан особистарҙың ҡоралы һинә төбәлгән. Бер шулай ҡамауҙа ҡалдыҡ. Юлдың бер яғында кукуруз үҫә, икенсе яғында - борсаҡ. Юлдан дошмандар үтеп тора. Улар булмағанда кукуруз баҫыуынан атлайбыҙ, тауыштар ишетелә башлаһа, ергә лыпын ятабыҙ. Шулай урманға еттек. Ашарға бер тәғәм, эсергә бер тамсы һыу юҡ. Алмағастарҙа ҙурайып та өлгөрмәгән йәшел алмалар табып ашаным, йыйылып ятҡан күләүек һыуын эстем... һәм дизентерия башланды. Командирға: "Атып китегеҙ мине, башҡаса барырға хәлем юҡ", - тием. Һалдаттар аслыҡтан шешенә башланы. Ҡайҙандыр үлгән быҙау табып, шуның итен өләштеләр, минә бауырҙан әҙерәк өлөш бирҙеләр, ашай алманым. Дөрөҫөн әйткәндә, 1943 йылға тиклем шул тиклем ауыр булды. 1943 йылдан һуң ғына, Т-34 танкылары, самолеттар эшләнә башлағас, еңелерәк тын алдыҡ.

➔ **Шундай ауырлыҡтар кисереп, һаманғаса ихлас, киң күңелле булып ҡала алғанһығыҙ. Нисек һеҙҙе һуғыш ҡырыҫландырманы?**

- Һөжүм алдынан Ворошилов 100 грамын, махорка тараталар ине. Мин бер ваҡытта ла эсмәнем дә, тартманым да. Ә тәмәке тартыусылар өсөн махорка булмауы - үлемгә тиң. Шул ваҡытта минә иң өлкән яугир килеп: "Ҡыҙым, махорканң бармы?" - тип һорай. "Биштәремде ҡарағыҙ, тапһағыҙ, алығыҙ", - тием. Тоҡ эсендә махорка түгелеп-сәселеп бөтә, шуны йыйып алалар. Икенсе проблема - уны төрөргә ҡағыҙ юҡ. Берәй ҡағыҙ остого табылһа - байрам. Махорка урайҙар ҙа, берҙе һурып, бер-берећенә бирәләр. Пехотала ла берҙән-бер ҡатынҡыҙ булдым, һуңынан танк бригадаһында ла яңғыҙым инем, әммә бер генә яугирҙың да ҡаты бәрелгәне, рәнйеткәне булманы, барыһы ла мине бала тип ҡарап, "ҡыҙым", "һеңлем" тип йөрөттө.

➔ **Башҡортостанға ниндәй яҙмыш ташланы?**

- Һуғыш тамамланғас, ҡайҙа барырға, тип уйландым. Тыуған еремдә туғандарым да, йәшәргә йортом да юҡ. Шуға Мәскәүгә юлландым. Бында ла бер танышым юҡ. Барыр ер юҡ, вокзалда ҡунып йөрөйөм, аҫҡа һалырға ла, ябынырға ла бер шинель. Бер аҙҙан иҙән йыуыусылар: "Әгәр залды һәм бәҙрәфте йыумаһаң, ҡунырға рөхсәт итмәйбеҙ", - тигән шарт ҡуйҙы. Барыр ерем булмағас, йыуҙым. Һуңынан киске мәктәпкә уҡырға индем. Уны тамамлағанда уҡытыусым: "Һин университетҡа барып ҡара, журналист булырһың, яҙыу һәләтең бар", - тигәс, МДУ-ның журналистика факультетын тамамланым. Генералдарҙың, юғары чинлы хәрбиҙәрҙең балалары барыһы ла Мәскәүҙә ҡалды. Минә ике урынға йүнәлтмә тәҡдим иттеләр - Себергә һәм Башҡортостанға. Ҡайһыһын һайларға белмәйем. Шул саҡ бер уҡытыусы: "Картуф яратаһыңмы?" - тип һораны. "Эйе", - тием. "Улайһа, Башҡортостанға бар. Унда картуф тәмле". Шулай итеп, Башҡортостанға килеп эләктем.

➔ **Бөйөк Еңеү көнөн байрам итеүгә йылдар өҫтәлә барған һайын ветерандар сафы кәмей, иҫәндәренә игтибар арта, тип йыш ҡабатлайбыҙ. Ошо ҡаҫтәрлекле мөнәсәбәтте үҙегеҙҙә тояһығыҙмы?**

- Дөрөҫөн әйткәндә - юҡ. Айырым кешеләр, социаль хеҙмәткәрҙәр, волонтерҙарҙан башҡа бер кемгә лә кәрәгем юҡ. Эйе, Еңеү көнө яҡынлашһа, килеп хәл беләләр ҙә, икенсе байрамға ҡәҙәр онlocal талар. Хатта коммуналь түләүҙәр артһа, сәбәбен белешеп шылтыратһам да: "Һеҙ һаман үлмәнегеҙме ни әле?" - тип һорайҙар. Ни өсөндөр барыһына ла минең үлемем кәрәк. Әйткәндәй, бер мут ханым, ярҙам иткән булып, ышанысыма инеп, меҫкенләнеп, бурысҡа аҡса алды. Таныштарымдан алып тороп, уға ярҙам итергә тырыштым. Һәҙемтәлә ул бурысын, миллион ярым һумдан ашыу, кире ҡайтарманы. Хоҡуҡ һаҡлау органдарына яҙыу ҙа, федераль каналдан килеп телевидениеға төшөрөү ҙә, киң мәғлүмәт сараларындағы сығыштар ҙа һөҙөмтә бирмәне: түләтергә тигән ҡарар булды, әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында мутлашыусы һыуҙан ҡоро сыҡты - һаман да бурысын түләмәй, ә мин пенсиямды өҙөпйолҡоп, таныштарыма бурысымды ҡайтарам. Муттарға, миллионлап урлашыусыларға, башҡалар иҫәбенә йәшәүселәргә бер ниндәй ҙә яза юҡ, күрәһең, беҙҙең илдә. Шуның өсөн ҡан ҡойҙоҡмо ни беҙ?..

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Беренсе Украина фронты составында Украинаны, Польшаны, Германияны, Чехословакияны фашизмдан азат итеүҙә ҡатнашып, һуғыш ауырлыҡтарын үҫмер генә көйө үҙ елкәһендә кисергән, 15 йәшендә "Хәрби ҡаҙаныштары өсөн" миҙалы, 19 йәшендә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм Беренсе Украина фронты ғәскәрҙәре командующийы, Советтар Союзы маршалы Коневтың Рәхмәт ҡағыҙы һәм башҡа бик күп наградалар менән бүләкләнгән һуғыш ветераны, һуғыш инвалиды, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Галина Андреевнаның һорауы ҡарашы, әйтерһең дә, миңә генә түгел, һәр беребеҙгә - яңы тыуған балаларҙан алып, төрлө кимәлдәге етәкселәргә, төрлө кимәлдәге депутаттарға төбәлде был ваҡытта. Ҡасандыр беҙ тыныс тормошта йәшәһен өсөн йәнен аямаған бәләкәй генә оло йөрәкле ҡатындың бөгөн ҙур, бөйөк илдә үҙенең проблемаһы менән ярҙамһыҙ ултырыуын нисек аңларға? "Ошо ваҡиғаларҙың һуңғы ҡатнашыусылары вафат булыу менән Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы хәҡиҡәттең яҡлауһыҙ ҡалыуынан ҡурҡам", - тип яҙа китабында Галина Андреевна. Минә ҡалһа, бөгөн башҡаларҙың проблемаһына төкөрөп ҡараған һәм ярҙам итеү өсөн ҡыл да ҡыбырлатмаған битараф кешеләр араһында йәшәүе күпкә ҡурҡынысыраҡ…**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

Көндәлек тормошоғоҙҙағы ҡәҙимгә ғәҙәт-ҡылыҡтарығыҙҙы ныҡлап күҙҙән үткәрегеҙ әле. Һеҙ мотлаҡ ҡыҫҡартырға, ихтыяждар исемлегенән төшөрөп ҡалдырырға мөмкин булған сығымдарығыҙҙы табасаҡһығыҙ. Һәр тингеҙ ҡиммәте йөҙ процентлы булған нәмәгә тотонолһон - ошондай девиз ҡуйығыҙ үҙегеҙгә.

Ә хәҙер һатып алырға теләгән нәмәләрҙең исемлеген төҙөгеҙ. Улар араһынан мотлаҡ кәрәк булғандарын һәм ун һумығыҙҙың туғыҙ һумына һатып алырға мөмкин булғандарын ғына һайлағыҙ. Ҡалған теләктәрегеҙҙе исемлектән һыҙығыҙ. Шунан сығымдарығыҙҙы иҫәпләгеҙ. Көнөләгөгөҙҙө йәйлап тултыра торған баяғы бер һумға теймәгеҙ. Уның тиҙерәк тулыуы һеҙҙең иң ҙур маҡсатығыҙ булып ҡалһын. Бюджетығыҙ менән эшләүҙе дауам итегеҙ. Бюджетығыҙҙы ҡалынаят барған көнөләгөгөҙ һағындағы тәүге ярҙамсығыҙға әйләндерегеҙ.

Аркадтың ошо һүҙҙәренән һуң уҡыусыларҙың береһе урынынан тора һәм:

- Мин ирекле кеше. Мин үҙемдә тормоштоң бөтөн хөрләктәренән файҙалана алам тип уйлайым. Шуның өсөн, бюджетҡа ҡарата ҡолдарса мөнәсәбәттән баш тартам. Был мине түбәнһетә һәм йөк ташыған ишәк хәленә төшөрә, - ти.

- Улай булғас, һинең бюджетыңды кем билдәләй һуң? - тип һорай унан Аркад.

- Уны мин үҙем эшләйем, - ти уҡыусы.

- Әгәр ҙә йөк ташыған ишәк үҙ йөгөн үҙе билдәләй алған булһа, ул унда келәм, биҙәнгестәр, алтын тәйәр инеме ни? Юҡ, әлбиттә. Ул иген, бесән, һыулы һауыт тейәп алыр ине.

Бюджеттың маҡсаты - һинең көнөләктең ҡалынайыуына ярҙам итеү. Ул һинә ни кәрәк - шуларҙың барыһын да булдырырға, башҡа теләктәреңде лә үтәргә ярҙам итеү өсөн кәрәк. Ул һинең иң изге хыялдарыңды тормошҡа ашырыу, еңел-елпеләренән ҡотҡарыу өсөн кәрәк. Ҡараңғы мәмәрйәлә сағылып ҡалған яҡтылыҡ кеүек, һинең бюджетың да көнөләгеңдән сыҡҡан һәр бер тинде белгертеп торасаҡ, сығымдарыңды контролдә тоторға ярҙам итәсәк.

Шулай итеп, үҙ сығымдарығыҙҙы иң мөһим, иң лайыҡлы теләктәрегеҙҙе ҡандырырлыҡ, ҡәнәғәтләнеү килтерерлек нәмәләргә генә тотоноғоҙ. Был сығымдарығыҙ мотлаҡ килемегеҙҙән ундан туғыҙ өлөшө генә булһын.

Джорж С. КЛЕЙСОН.
(Дауамы бар).

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ…

## Ҡуйы йәшел төҫтәге йәшелсәләр - күҙҙәр өсөн

Лютеин брокколиға һәм башҡа япраҡлы йәшелсәләргә ҡуйы йәшел төҫ бирә. Шпинат, кәбестә, ғөмүмән, япраҡлы йәшелсәләр ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефен, уларҙағы каротиноидтар (лютеин һәм зеаксантин) күреү аппаратының йәш буйынса барлыҡҡа килгән проблемалары артыуын кәметә. Шуға күрә аҙнаһына 350 грамм япраҡлы йәшелсәләр ашарға тәҡдим ителә. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, каротиноидтарҙың (томаттарҙағы ликопин, ҡыҙғылт-һары емештәрҙәге бета-каротин һәм япраҡлы йәшелсәләрҙәге лютеин) яҡшы үҙләштерелеүенә моно- һәм майлы кислоталарға бай булған авокадо, зәйтүн емеше, зәйтүн майы, әстерхан сәтләүеге, етен орлоғо ҡулланыу ярҙам итә.

## Еҙ, цинк һәм селен ҡартайыу процесын әкренәйтә

Ҡайһы бер минераль матдәләр ҙә (цинк, еҙ, селен) антиоксидант активлығына эйә. Нигеҙҙә, быны уларҙың антиоксидант яҡлаулы ферменттар составына инеүе менән аңлатырға мөмкин. Цинк 20 ферменттың, шул иҫәптән антиоксидант, составында бар. Уның төп сығанағы булып ит, ҡош ите, ҡаты сырҙар, сәтләүектәр, креветкалар тора.

Еҙ күҙәнәктәрҙе ирекле радикалдарҙың зыянлы йоғонтоһонан һаҡлаусы супероксиддисмутаза ферменты составына инә. Еҙҙең организмға инеүенең төп сығанаҡтары булып бауыр, дингеҙ продукттары, сәтләүектәр, ҡарабойҙай һәм һоло ярмалары тора. Селен икенсе мөһим антиоксидантлы фермент - глутатионпероксидаза составына инә. Организмдың уға дефициты булғанда, йөрәк-ҡан тамырҙары, яман шеш ауырыуҙары, ауыр металдар менән ағыуланыу хәүефе арта. Селендың төп сығанаҡтары: ит, балыҡ, йәшелсә-емештәр. Ул аскорбин кислотаһы ярҙамында яҡшыраҡ үҙләштерелә. Туҡлыҡлы матдәләрҙән башҡа, аҙыҡ-түлек башҡа матдәләрҙең комбинацияһына эйә, уларҙың күпселеге дарыу үләндәрендә бар. Үҫемлек сығанаҡлы аҙыҡ-түлектә биологик актив өләштәр йәгни уларҙың метаболиттары бар. Улар быуаттар дауамында дауа булараҡ ҡулланылған. Үҫемлектәрҙең япраҡтары һәм орлоҡтары даими рәүештә күҙгә күренгән, ультрафиолет һәм башҡа нурланыуға дусар була, һөҙөмтәлә уларҙа кислородтың активлашҡан формаһы барлыҡҡа килә. Шуға күрә улар күп һанлы тәбиғи антиоксиданттарға бай.

## Ҡартлыҡтан "аҙыҡтың минор компоненттары" һаҡлай

Шулай ҙа күпселек үҫемлек антиоксиданттарын ризыҡтың минор компоненты тип йөрөтәләр. Минор компоненттарға лигниндар, флавоноидтар, изофлавондар, индолдар, фенол кислоталары, катехиндар, антоциандар һәм һуғанда булған берләшмәләр инә. Ризыҡ булараҡ ҡулланылған үҫемлектәрҙә 2000-дән ашыу пигмент бар. Һаҡлау йоғонтоһо булған был матдәләрҙең барыһының да ҡулланылыуын тәьмин итеү өсөн төрлө үҫемлек ризыҡтарын күберәк ҡулланырға кәрәк.

Флавоноидтар - ризыҡ составында кеше организмына даими ингән үҫемлек туҡымаларының айырып алғыһыҙ өлөшө. Шалфейҙа, арахиста, мамыҡ үҫемлегендә (хлопчатник) билдәле күләмдәге (25 -30 процент) майҙар менән бер рәттән флавоноид берләшмәләр бар.

С. КУЗИНА.
(Дауамы бар).



**7 МАЙ**
**ДҮШӘМБЕ**
**БСТ**

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (16+).
11.00 "Итоги недели".
11.45 "Специальный репортаж" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Үткән ғүмер" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 23.00 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 "Наука 102" (12+).
15.30 "Книга сказок".
15.45 "Байтус" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Перекличка" (6+).
16.30, 17.30, 20.15 Новости.
17.00 "Этот день мы приближали как могли!" (12+).
17.45 "Красная кнопка" (16+).
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Бизнес-проба" (12+).
20.00 "Дорожный патруль" (16+).
20.45 Футбол. РФПЛ. ФК "Рубин" (Казань) - ФК "Уфа".
23.30 "Автограф" (12+).
24.00 "А зори здесь тихие..." Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.00 "Бәхетнамә" (12+).

**8 МАЙ**
**ШИШӘМБЕ**
**БСТ**

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (16+).
11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Бизнес-проба" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Пером и оружием" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Великой Победе.
17.00 "Дознание" (16+).
17.45 "Орнамент" (12+).
18.00 "Бай" (12+).
19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".
19.30 "Клио" (12+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Деловой Башкортостан"
20.45 "Криминальный спектр" (16+).
21.00 "Уфимское "Времечко".
23.00 "Мои года - мое богатство" (12+).
02.00 "А зори здесь тихие..." (12+).

**9 МАЙ**
**ШАРШАМБЫ**
**БСТ**

07.00 "С Днем Победы!" (12+).
07.45, 13.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Всадники". Худ. фильм (12+).
10.00, 15.30, 17.30, 19.00 "Весна Победы". Телемарафон.
12.00 Парад Победы. Красная Площадь.
13.00, 23.00 "Бессмертный полк".
14.15 "Медаль" (12+).
15.00, 17.00, 21.30 Новости.
15.15 "Победные рассказы".
16.30 "Помните ли вы нас? (12+).
18.55 "Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма". Минута молчания.
21.00 Праздничный концерт, посвященный Великой Победе (12+).
22.00 "100 имен Башкортостана" (12+).
23.45 "А зори здесь тихие...-3". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.45 М.Карим. "Долгое, долгое детство" (12+).

**10 МАЙ**
**КЕСАҘНА**
**БСТ**

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (16+).
11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Дорожный патруль" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Пером и оружием" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 "У дачи" (12+).
15.30 "Борсаҡ".
15.45 "Йырлы кәрәҙ".
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).
17.00 "Моя Республика" (12+).
17.45 "Современник".
18.00 "Башҡорттар" (6+).
19.00 Финал чемпионата РБ по интерактивному футболу (12+).
21.00 "Уфимское "Времечко".
22.00 "Вечерний телецентр".
23.00 "Колесо времени" (12+).
24.00 "А зори здесь тихие..." Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.00 "Бәхетнамә" (12+).

**11 МАЙ**
**ЙОМА**
**БСТ**

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Илья Старинов. Личный враг Гитлера" (12+).
11.00 "Краски войны" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Криминальный спектр" (16+).
12.00 "Одолжи мне жеребца" (12+).
14.00 "Күңелем мондары" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45 "Бала-саға" (6+).
15.30 "Сулпылар".
15.45 "Шәп арба" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Зеркальце" (6+).
16.45 "Специальный репортаж" (12+).
17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).
17.45 "Замандаш" (6+).
18.00 "Йома".
19.00 "Хазина о Хазине".
19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Полезные новости" (12+).
20.45 "Большой чемодан" (6+).
22.00 "Наука 102" (12+).
23.15 "Байыҡ-2018" (12+).
24.00 "А зори здесь тихие...-5". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.00 И.Юмагулов. "Нэркэс" (12+).

**12 МАЙ**
**ШӘМБЕ**
**БСТ**

07.00 "Доброе утро!" (12+).
07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Карстен и Петра на сафари" (12+).
09.30 "Здоровое решение" (12+).
10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).
10.30 "Большой чемодан" (6+).
11.15 "У дачи" (12+).
11.45 "Орнамент" (12+).
12.00 "Тәмле" (12+).
13.00 Замандаш" (6+).
13.15 "Учу башкирский язык".
13.30 "Бай" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
16.00 "Байыҡ-2018" (12+).
17.00 Творческий вечер Сары Буранбаевой (12+).
19.00 "Колесо времени" (12+).
20.00 "Весело живем" (12+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Күңелем мондары" (12+).
21.30 Новости.
22.00 "Следопыт" (12+).
22.30, 01.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры представляет..." (12+).
24.00 "А зори здесь тихие-6". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.15 Т.Гарипова. "Гильмияза" (12+).

**13 МАЙ**
**ЙӘКШӘМБЕ**
**БСТ**

07.00 "Доброе утро!" (12+).
07.45 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Фиксики".
09.00 "Йома".
09.30 "Бай баҡса" (12+).
10.00 "Перекличка" (6+).
10.15 "Выше всех!" (6+).
10.30 "Ал да гөл" (6+).
10.45 "Книга сказок".
11.00 "Байтус" (6+).
11.15 "Сулпылар".
11.30 "Гора новостей" (6+).
11.45 "Алтын тирмә" (12+).
12.30 Итоги недели (на башк.яз.).
13.15 "Учу башкирский язык" (6+).
13.30 "Үткән ғүмер" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
15.15 "Дорога к храму".
15.45 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" - ФК "Тосно" (Ленинградская область).
18.00, 01.00 "Жду и надеюсь". Худ. фильм (12+).
20.15 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).
20.30 "Моя республика" (12+).
21.00 "Дознание" (16+).
21.30 "Итоги недели".
22.15 "Специальный репортаж" (12+).
22.30 "Красная кнопка" (16+).
23.15 "Вечер.com" (12+).
24.00 "Свидание с джазом" (12+).

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"

**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене,* не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе лучшие теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!

Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.



### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.




### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия 5 лет, срок эксплуатации не ограничен.

ЭКОНОМИЧНЫЙ
2-3,5 кВт в сутки
при использовании терморегулятора

БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ
Срок службы не ограничен, гарантия 5 лет

БЕЗОПАСНЫЙ
100% пожаробезопасность

КОМФОРТНЫЙ
Не сушит воздух, не сжигает кислород

ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ
Справится любой хозяин дома

ЭКОЛОГИЧНЫЙ
Наша продукция соответствует самым высоким санитарным требованиям

ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ
Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество

ТЕПЛЭКО

Обогреватель "ТеплЭко" является победителем конкурса "100 лучших товаров России 2015 г., 2017 г.", патент РФ № 152820 "Лучшие товары и услуги ГЕММА 2017 г."

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru

На правах рекламы.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ КАВАЛЕРИЯ ДИВИЗИЯҺЫ ГЕРОЙҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**15-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Торна. Троцкий. Динамо. Осирис. Клерк. Ялан. Жиффар. Ан. Пришвин. Иҙел. Ауди. Сана. Каюров. Аякли. Рокки. Ниәт. Ромб. Шәлше. Сейә. Рота.

**Вертикаль буйынса:** Крупская. Дзержинск. Клавесин. Тана. Игенсе. Маяҡ. Ойотко. Артыш. Аша. Әҫәр. Ленин. Карл. Афина. Шарт. Орджоникидзе. Изюбр. Рәүф. Свердлов.

ИҒТИБАР!

# КӨСЛӨЛӘР КӨС ҠҮРҺӘТӘ




**Өфөлә 12 майҙа "Башҡортостан батыры" тип аталған мәҙәни-спорт байрамы үтәсәк. Ҡунаҡһарай йорто алды үҙенсәлекле бәйге майҙанына әүереләсәк.**

Ойоштороусылар билдәләүенсә, сара халыҡтың иғтибарын даими рәүештә спорт менән шөғөлләнеүгә йүнәлтеү, шулай уҡ тарихи-мәҙәни мираҫыбыҙҙы һаҡлау, Рәсәй халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты, татыулыҡты, хеҙмәттәшлекте нығытыу маҡсатында үткәрелә. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән 12 иң көслө спортсы үҙ-ара ярышасаҡ. Программаға 120 килограмлыҡ бүрәнәне күтәреү, йөк машинаһын һөйрәтеү кеүек дисциплиналар ҙа индерелгән. Спорт ярыштарынан тыш, башҡорт халыҡ спорт төрҙәре буйынса бәйге буласаҡ. Мәҫәлән, стронгмендар 25 килограмлыҡ суҡмарҙы алыҫлыҡҡа ташлау буйынса ярышасаҡ. Ижади коллективтар сығышы ла көтөлә. Сараны ойоштора һәм алып бара - пауэрлифтинг һәм армреслинг буйынса спорт мастеры, "Планетаның иң көслө кешеһе - 2005" бәйгеһе вице-чемпионы, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" турнирында 4 тапҡыр еңеүсе Эльбрус Ниғмәтуллин. 12.00 сәғәттә башлана.

# МАЙҘАНДА БЕЙЕЙБЕҘ



**Өфө ҡала хакимиәте менән "Уфанет" компанияһы мәктәпте тамамлаусы сығарылыш класс уҡыусыларын, уларҙың ата-әсәләрен, уҡытыусыларҙы, бөтөн ҡала халҡын "Һуңғы ҡыңғырау"ға арналған "Яҙғы бал"ға саҡыра.**

"Яҙғы бал" ойоштороla башлағандан алып унда 53 800 11-се класс уҡыусыһы ҡатнашҡан. Быйыл ул 13 ҡалала үтә. "Яҙғы бал - 2018" сараһының төп темаһы - "Тыуған яҡ". Был көндө ҡала үҙәге мәктәп кәйефе, бейеүҙәр һәм музыка атмосфераһына сорналасаҡ. Уҡыусылар полонез, бранль, мәктәп вальсы, рок-н-рол, фрешданс һәм башҡа жанрҙағы бейеүҙәр башҡарасаҡ. Сара 26 майҙа 13.00 сәғәттә, Совет майҙанында башланасаҡ.

"Яҙғы бал" байрамы ҡатнашыусыларының һәм ҡунаҡтарының хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн Башҡортостандың баш ҡалаһында 25 һәм 26 майҙа бер нисә урам участкаһын ябалар. Атап әйткәндә, 25 майҙа төнгө сәғәт 10-дан 26 майҙа төнгө сәғәт 9-ға тиклем киләһе урам участкаларында хәрәкәт ябыла: Октябрьский урамы - Ленин урамы киҫелешенән Цюрупа урамы киҫелешенә тиклем; Ленин урамы - Пушкин урамы киҫелешенән Коммунистик урамы киҫелешенә тиклем; Театр урамы - Зәки Вәлиди урамы киҫелешенән Пушкин урамы киҫелешенә тиклем; Пушкин урамы - К. Маркс урамы киҫелешенән Цюрупа урамы киҫелешенә тиклем.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (21) дүшәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |
| 8 (22) шишәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (23) шаршамбы | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |
| 10 (24) кесе йома | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:34 | 21:04 | 22:34 |
| 11 (25) йома | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:36 | 21:06 | 22:36 |
| 12 (26) шәмбе | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:38 | 21:08 | 22:38 |
| 13 (27) йәкшәмбе | 3:46 | 5:16 | 13:30 | 19:40 | 21:10 | 22:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 май "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**6 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**8 май "Прометей"** (М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" пьесаһы буйынса) 14+

**10 май "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма 16+

**11 май "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 май "Большой секрет"** (А. Рахманкулова) 0+

**6 май "Игра в прятки"** (Н. Шувалов) 0+

Спектаклдәр башлана **12.00, 14.00**

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 май "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**6 май "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**6 май "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

**11 май "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 май "Аһ, ошо ғашиҡтарҙы!"** (Р. Кинйәбаев), комедия 12+

**11 май "Ҡарауыл! Атай өйләнә..."** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия 12+

## СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

# БЫЛ ОРДЕНҒА ИЛДАР ЛАЙЫҠЛЫ!




**Башҡортостандың баш ҡалаһында Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы, Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры, "Алтын битлек" милли театр премияһы лауреаты, ике тапҡыр "Грэмми" премияһын яулаусы Илдар Абдразаҡовтың I Халыҡ-ара музыка фестивале сиктәрендә хәйриә концерты үтте.**

"Башҡортостан" дәүләт концерт залында фестивалдең бихисап абруйлы ҡунаҡтары, сәйәси-йәмәғәт эшмәкәрҙәре, Өфөнөң мәҙәни йәмәғәтселеге, Илдар Абдразаҡовтың дуҫтары һәм яҡындары һәм опера сәнғәтен үҙ итеүселәр йыйылды. Концертта Илдар Абдразаҡов, Мария театры солисы Сергей Скороходов һәм Башҡорт опера һәм балет театры солистары Диляра Иҙрисова, Лариса Әхмәтова, Иҙел Аралбаев һәм Владимир Копытов ҡатнашты. Улар Раушан Яҡупов идаралығында Башҡортостан Республикаһы Милли симфоник оркестры оҙатыуында күренекле опера арияларын һәм дуэттарын башҡарҙы. "Мәрхәмәт" хәйриә мәғариф фонды концерттың ойоштороусыһы булып сығыш яһаны. Был кис залда балалар - фондтың тәрбиәләнеүселәре ултырҙы. Һатылған билеттарҙан 2 834 400 һум килем төшкән, улар фонд программаларын ғәмәлгә ашырыуға тапшырыласаҡ. "Һатылған билеттарҙан ингән аҡса Балалар үҫеше үҙәгенең 250-нән ашыу тәрбиәләнеүсеһенә кәрәкле ярҙам алырға мөмкинлек бирәсәк. Был инвалид балалар модулле өҫтәмә белем алған тәүге һәм берҙән-бер учреждение", - тип билдәләне "Мәрхәмәт" хәйриә фонды директоры Айгөл Гәрәева һәм Илдар Абдразаҡовтың Халыҡ-ара музыка фестивале сиктәрендә хәйриә концерты яҡшы йолаға әүерелер тигән ышаныс белдерҙе.

Концертта Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов әсәһе менән булды һәм Илдар Абдразаҡовты республикабыҙҙың милли геройы - Салауат Юлаев ордены менән бүләкләне. "Был, ысынлап та, лайыҡлы награда, Илдар Әмир улы республика өсөн бик күпте башҡара, - тине Башҡортостан Башлығы. - Донъялағы иң көслө, һоҡланғыс тауыш. Беҙ һеҙҙең булыуығыҙ менән ғорурланабыҙ һәм бәхетлебеҙ, ҙур рәхмәт һеҙгә!"

# БРАЗИЛИЯҒА КИТТЕЛӘР



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле Бразилияға гастролдәргә юллана. Гастролдәр 10 майҙан 31-енә тиклем дауам итә.**

Ансамбль артистары Рибейран-Прету, Сантос, Кампинас, Уберландия, Гояния, Витория, Рио-де-Жанейро, Ново-Хамбурго һәм Порту-Алегри ҡалаларында концерт менән сығыш яһай. Гастролгә 50 кеше бара. "Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле 2015 йылда Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттарының мәҙәни программаһында әүҙем ҡатнашты. Саранан һуң коллектив етәкселегенә саммитта ҡатнашыусыларҙан ШОС һәм БРИКС илдәрендә ансамблдең гастролдәрен ойоштороу тураһында бик күп тәҡдимдәр килде", - тип хәбәр иттеләр ансамблдең матбуғат хеҙмәтенән. Ғәскәровсылар Бразилияла Ғәскәровтың алтын фондынан башҡорт һәм Рәсәй халыҡтары бейеүҙәре ингән концерт программаһы менән Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Бейеүселәребеҙ тәүгеләрҙән береһе булып Ер шарының бөтә ҡитғаларында Башҡортостандың мәҙәни бәйләнештәрен асты. Фәйзи Ғәскәров ансамбле 70 йыл буйына донъя илдәрен башҡорт һәм күп милләтле Рәсәй мәҙәниәте менән таныштыра.

# КОНКУРС ИСЕМЛЕГЕНДӘ...



**Башҡорт драматургы Шәүрә Шәкурованың "Зәңгәр томандар артында" пьесаһы "Баденвайлер 2018" халыҡ-ара драматургия конкурсы исемлегенә инде. Конкурста 22 илдән 164 авторҙың 224 пьесаһы ҡатнашты.**

"Был пьесаны мин Башҡортостандың драматургия һәм режиссура үҙәге үткәргән драматургия семинары барышында яҙҙым. Геройҙарымды ҡасан да булһа сәхнәлә күрергә теләйем", - ти Шәүрә Шәкурова. "Зәңгәр томандар артында" пьесаһы геройҙары, А. П. Чеховтың "Апалы-һеңлеле өсәү" пьесаһы геройҙары кеүек үк, тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ бәхет көтөп йәшәй. Ләкин XX быуат башы геройҙары ауылдан китергә теләһә, замандаштарыбыҙ иһә тыуған яҡтарына ҡайтыу тураһында хыяллана. Марат, Шамил, Зәлиә һәм Эльмира Мәскәүҙә йәшәй, әммә уларҙың бөтә уйҙары - Өфө һәм тыуған ауылы хаҡында. Тормош гөрләп тора, улар ғашиҡ була, айырылыша, кемдер хыянат итә, кемдер тоғро ҡала. Драма жанры заманыбыҙҙың мөһим мәсьәләләрен күтәрергә, төбәктәрҙән килгән йәштәрҙең илебеҙҙең баш ҡалаһында ниндәй тойғо кисереүҙәрен күрһәтергә мөмкинлек бирә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Зәңгәр томандар артында" пьесаһы 2017 йылда 15-се Халыҡ-ара әҙәбиәт Волошин конкурсы (Ҡырым); 13-сө "Драма ваҡыты, 2017, йәй" халыҡ-ара заманса драматургия конкурсы; Бойондороҡһоҙ халыҡ-ара заманса драматургия конкурсы исемлектәренә инде.

# ЯҠУТСА ЛА УҠЫЙҘАР




**"Урал-батыр" эпосы яҡут телендә донъя күрҙе. Китап Саха (Яҡутстан) Республикаһының Дәүләт Йыйылышы (Ил Тумэн) башланғысы буйынса "Халыҡтарҙың эпик ҡомартҡылары" проекты сиктәрендә баҫылып сыҡты. Яҡут телендәге вариантта китап "Ураал Баатыр" тип атала. Баҫманың тиражы - 1000 дана.**

Яҡутстан парламенты рәйесе Александр Жирков Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевҡа ҡотлау ебәрҙе. "Ошо әһәмиәтле ваҡиға буйынса ҡотлауҙар һәм халыҡтарыбыҙ мәнфәғәтендә артабан хеҙмәттәшлек итеүгә әҙерлеккә вәғәҙәләр ҡабул итегеҙ", - тиелә хатта.

"Боронғо мифологияны үҙ эсенә алған, башҡорт һүҙ сәнғәте ҡомартҡыһына әүерелгән "Урал-батыр" эпосы донъяуи мәҙәни мираҫ феномены булып һанала. Эпос ТӨРКСОЙ-ҙың матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә индерелгән, бер нисә тапҡыр төрлө телдәргә тәржемә ителгән, - тине Константин Толкачев. - Китаптың Яҡутстанда баҫылып сығыуы, һис шикһеҙ, төбәктәребеҙҙә йәшәүселәрҙең мәҙәни алмашыуына, рухтары яҡынайыуға булышлыҡ итергә тейеш". Унын билдәләүенсә, 2017 йылдың декабрендә Башҡортостан менән Яҡутстан парламенттары араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Документ закон сығарыу өлкәһенән тыш, инвестиция, демография, йәштәр сәйәсәте, социаль именлек һәм халыҡтың рухи үҫеше, илебеҙ тауар етештереүселәренә ярҙам итеү, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендә лә үҙара эш итеүҙе күҙ уңында тота, тип хәбәр итә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪЛЫ ДОШМАН...

## намыҫһыҙ дуҫтан артығыраҡ

Йүнле ҡатын-ҡыҙ биографияһы - ул утыҙ йәшкә тиклем хронологиянан, утыҙҙан һуң мифологиянан тора.

**(Дон-Аминадо).**

Уңышҡа юл ирҙәрен алға табан төрткөләгән ҡатын-ҡыҙҙар менән тулы.

**(Томас Дьюар).**

Йөрәктең һәм аҡылдың бары тик таууш биреү хоҡуғы ғына бар. Барыһын да... тән хәл итә.

**(Поль Жеральди).**

Беҙгә дуҫлыҡ һәм изгелек етмәй, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, дуҫлыҡҡа һәм изгелеккә беҙ етмәйбеҙ.

**(Марсель Жуандо).**

Беҙҙең кисәге дошмандар бөгөн шундай матур хәтирәләргә әйләнә.

**(Кароль Ижиковский).**

Әгәр ҙә уҡыусы яҙыусыны белмәй икән, бында уҡыусы түгел, яҙыусы ғәйепле.

**(Илья Ильф).**

Баланың холҡона тәьҫир итеү өсөн иң ҡулай ваҡыт - ул тыуғанға тиклемге йөҙ йыл.

**(Уильям Индж).**

Ерҙә үк үҙ ожмахын төҙөргә маташҡан кешенең тормошонда бынамын тигән тамуҡ барлыҡҡа килеүе лә мөмкин.

**(Поль Клодель).**

Тәнҡитселәр һәр ваҡыт сағыштыра. Ә сағыштырып булмағанды улар күрмәй.

**(Жан Кокто).**

Йәшлек - ул ҡулдан ысҡындырылған мөмкинлектәр дәүере.

**(Колетт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Берәү күршеһенә кәңәш һорап ингән. Әммә күршеһе уны тыңларға ла теләмәгән. "Үҙеңә башҡа кәңәшсе эҙлә, күршем, - тигән ул. - Һинә шулай яҡшыраҡ булыр, сөнки мин һинең аҫтыртын дошманың, ә дошманлыҡ - насар кәңәшсе. Ана, дуҫтарыңдың береһенә кәңәш ит, улар һиңә яҡшы кәңәш бирер". "Һинең һүҙҙәреңдән мин шуны аңланым, күршем, - тигән кәңәш һораусы. - Һин, ысынлап та, миңә аҫтыртын дошманһың. Әммә был хаҡта һин миңә үҙең әйтәһең икән, тимәк, һин намыҫлы кешеһең. Ә намыҫлы дошман намыҫһыҙ дуҫтан мең тапҡыр артығыраҡ ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 789/05